# Яйыҡ

12+

Йома, 21 апрель, 2023 йыл.
№16 (6239)

Учалы районы һәм ҡалаһының ижтимағи-сәйәси гәзите. Йома көнө сыға. 1991 йылдың 1 ғинуарынан баҫыла.


Урындағы үҙидара көнөнә

## Ауылы өсөн янып йәшәй



*Әмир Искәндәр улы Харисов*

***Учалы филармонияһында Урындағы үҙидара көнөнә арналған сара үтте. Унда район хакимиәте хеҙмәткәрҙәре, ауыл Советтары башлыҡтары, белгестәре ҡатнашты.***

Сараны район хакимиәте башлығы Руслан Ғиләзетдинов шәхсән үҙе асты.

- Бөгөн урындағы үҙидара - халыҡҡа иң яҡын торған власть органы. Граждандар менән дәүләт араһындағы күпер, берләштереүсе көс булып тора, - тип билдәләне ул.

Был көндө район үҫешенә тос өлөш индергән, йәмғәт тормошонда әүҙем ҡатнашҡан иң яҡшы үҙидара хеҙмәткәрҙәре, ветерандары тәбрикләнде. Хөрмәт һәм абруй башҡарған эштәренә ҡарап килә шул. Тәбрикләнеүселәр араһында Ахун ауыл Советы башлығы Әмир Харисов та бар.

Абруйлы, ойоштороу һәләтле, кешеләр менән уртаҡ тел таба белгән Әмир Искәндәр улы башта ауыл Советында эштәр менән идара итеүсе вазифаһын биләй, ә 2011 йылдан бирле хакимиәт башлығы вазифаһын тарта. Ошо ваҡыт эсендә ул Ахун ауылын, халҡын, уларҙың шөғөл-һөнәрҙәрен, йәшәү рәүешен, проблемаларын биш бармағы кеүек белеп бөткән. Алсаҡ, кеше хәстәренә битараф ҡала белмәгән башлыҡ ауыл халҡының ышанысын күптән яулаған.

Әмир Искәндәр улы ошо ауылда тыуып үҫә. Һәр ир-егет кеүек Тыуған ил алдындағы бурысын да үтәй. Юғары белемле - Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетын тамамлаған. Хеҙмәт юлын 1985 йылда йүнәлтмә буйынса Учалы ауылына мәктәпкә ҡайтып башлай. Бер йыл үткәс, тормош иптәше менән Ахун мәктәбенә күсәләр (әйткәндәй, икеһе лә тарих уҡытыусыһы булып). 1992 йылдан ауыл Советына эштәр менән идара итеүсе вазифаһын тәҡдим итәләр.

Дөйөм эш өсөн янып йәшәгән, халыҡтың проблемалары өсөн борсолоп, уны атҡарып сығарыу юлдарын эҙләгән хакимиәт башлығынан ахундар ысын мәғәнәһендә уңа. Төрлө һорауҙар менән уға йыш шылтыраталар. Эйе, берҙәм булғас, донъяуи мәсьәләләр хәл ителә бара. Яҙын урам, ихаталарҙы тәртипкә килтереү буйынса өмәләр уҙғарыу, төҙөкләндереү, көтөүҙө ойоштороу булһынмы, барыһы ла хакимиәт башлығынан башҡа уҙмай.

- Ахун ауылында 900-ҙән ашыу йорт иҫәпләнә. Ахун ауылы халҡы бик эшсән һәм егәрле бит ул. Крәҫтиән-фермер хужалығы һәм шәхси хужалыҡ менән көн күреүселәр бихисап. «Урал аръяғы Агро» МТСы, «Уралташ», Учалы тау-байыҡтырыу комбинатында эшләйҙәр егеттәребеҙ. Тырышҡан кешегә йәшәргә була. Ауылыбыҙҙа йәшәү өсөн бөтә шарттар ҙа бар - юлдар төҙөкләндерелә, әле бына Партизан урамына 320 метр асфальт һалдырҙыҡ, мәктәп капиталь ремонтланды, 20-нән ашыу магазин бар, дарыухананы, яғыулыҡ станцияһын тергеҙеү өҫтөндә эштәр бара. Хоҙайға шөкөр, ауылдаштарыбыҙ берҙәм, татыу. Эште күтәреп сыҡһаң, ҡушылырға ғына торалар, - ти ул.

Әйткәндәй, Әмир Искәндәр улы районыбыҙҙа беренселәрҙән булып 2018 йылда оҙайлы һәм намыҫлы хеҙмәте, урындағы үҙидараны үҫтереүгә ҙур өлөш индергән өсөн Башҡортостан республикаһы Башлығының Хөрмәт грамотаһы менән наградлана.

Харисовтар бер ул һәм ҡыҙ тәрбиәләп үҫтергәндәр. Әлеге көндә бәхетле олатай һәм өләсәй 3-сө класта уҡып йөрөгән берҙән-бер ейәнсәрҙәренең уңыштарына һөйөнөп бөтә алмай.

**Вилиә ЯНБАЕВА.**

Ҡотлайбыҙ!

## Тыуған илебеҙ мәнфәғәтендә

***Хөрмәтле урындағы үҙидара органдары хеҙмәткәрҙәре һәм ветерандары, депутаттар!***

***Урындағы үҙидара көнө уңайынан ихлас ҡотлауҙарҙы ҡабул итеп алығыҙ!***

***Муниципаль власть органдарына социаль һәм иҡтисади үҫеш буйынса үтә яуаплы бурыстар йөкмәтелгән. Бөгөн урындағы үҙидара институты төҙөкләндереү, торлаҡ-коммуналь хужалығы, мәҙәниәт, спорт һәм башҡа тармаҡтарҙағы көндәлек мөһим мәсьәләләрҙе хәл итә. Был ҡатмарлы өлкәлә эшләү оҫталыҡ, грамоталы идаралыҡ, халыҡ мөрәжәғәт иткән мәсьәләләргә битараф ҡалмауҙы талап итә.***

***Район үҫешенә индергән тос өлөшөгөҙ өсөн муниципаль хеҙмәткәрҙәргә, хөрмәтле ветерандарыбыҙға рәхмәт белдерәм. Ихлас күңелдән һеҙгә ныҡлы һаулыҡ, именлек, һүрелмәҫ энергия теләйем! Тыуған районыбыҙ һәм унда йәшәүселәр файҙаһына тырышып эшләгеҙ, һәр башланғыстарығыҙ уңышлы булһын.***

***Руслан ҒИЛӘЗЕТДИНОВ,***
***район хакимиәте башлығы.***

Кеше һәм тәбиғәт

## Ҡармаҡ менән генә тоторға мөмкин

***Ыуылдырыҡ сәсеү дәүере башланыу сәбәпле, Башҡортостанда 15 апрелдән 15 июнгә тиклем балыҡсылыҡ кәсебе тыйылды; Түбәнге Кама һыу һаҡлағысында һәм Ағиҙелдә - 25 апрелдән 5 июнгә тиклем.***

Һәүәҫкәр балыҡсыларға ярҙан тороп һәм бер ҡармаҡ менән генә тоторға мөмкин. Тәүлегенә иң күбендә - 5 килограмм. Ағасаҡ (жерех), һыла (судак), һаҙан (сазан) - 40 сантиметрҙан, ҡорбан балығы (лещ) - 28 сантиметрҙан, йәйен - 90 сантиметрҙан, ҡыҫала - 10 сантиметрҙан бәләкәйерәк икән, һыуға кире ебәреү талап ителә, тип хәбәр итәләр БР Һыу ресурстарына дәүләт контроле, надзор һәм һаҡ бүлегенән. Талаптарҙы күҙәтмәүселәргә 200 һумдан алып 21 мең һумға тиклем штрафтар һалынасаҡ, тип тә ҡурҡыталар.

Әммә бар яуаплылыҡ үрҙә яҙған штраф менән генә сикләнә тип яңылышып ҡуймағыҙ! Был хаҡта Учалы районы буйынса эске эштәр бүлегенең өлкән тәүтикшереүсеһе майор Динара Фәсхетдинова аныҡ бәйән итте:

- Ыуылдырыҡ сәсеү урындарында тотҡан, ҙур зыян килтергән йә тыйылған кәсеп ысулдарын ҡулланған өсөн РФ Енәйәт кодексының 256-сы статьяһы буйынса яуап тоторға тура киләсәк. Яза - 300-500 мең һум штраф, 2 йылға тиклем холоҡ төҙәтеү эштәре йә шул уҡ ваҡытҡа иректән мәхрүм ителеү. Ошо енәйәт вазифа хәлен файҙаланып йәки төркөм составында башҡарыла икән, 500 мең - 1 миллион һум штраф, 2-5 йылға ирektән мәхрүм ителеү.

Динара Фәнил ҡыҙы ошо хаҡта ла иҫкәртә - ыуылдырыҡ сәсеү дәүерендә тәбиғәткә килтерелгән зыян иҫәпләү таксаһы ике тапҡырға арттырыла. Әйтәйек, суртан өсөн зыян быға тиклем 925 һум билдәләнгән булһа, 1850 һумға әйләнә, алабуға, сабаҡ - 500 һумға (бер башҡа, тараҡандай ғына булһа ла!), ҡорбан балығы 1000 һумға баһалана. Ошо зыянға ҡарап, ғәйепләнең административ йә енәйәт яуаплылыҡҡа тарттырылыуы билдәләнә лә инде. Тәбиғи, законһыҙ кәсеп ҡоралдары (ау, кәмә һәм башҡа) дәүләт файҙаһына конфискациялана.

Аҙағынан терһәк тешләргә тура килмәһен, былтыр өс ошондай осраҡ булһа, 2021 йыл 6 яҡташыбыҙ был статья буйынса енәйәт яуаплылығына тарттырылғайны!

**Илшат ӘҒЛӘМОВ.**

**21 апрель - Шәүүәл айының беренсе көнө. Ҡояш ҡалҡа - 06.02, байый - 20.28 сәғ. 20 апрелдән яңы Ай.**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| **24 апрель,** дүшәмбе. Аяҙлы-болотло, көндөҙ: +15, төндә: +4. | **25 апрель,** шишәмбе. Аяҙлы-болотло, көндөҙ: +17, төндә: +3. | **26 апрель,** шаршамбы. Аяҙлы-болотло, көндөҙ: +19, төндә: +8. | **27 апрель,** кесе йома. Йонсоу, көндөҙ: +17, төндә: +7. | **28 апрель,** йома. Аяҙлы-болотло, көндөҙ: +19, төндә: +4. | **29 апрель,** шәмбе. Ямғыр, көндөҙ: +12, төндә: +7. | **30 апрель,** йәкшәмбе. Аяҙлы-болотло, көндөҙ: +15, төндә: +9. |

Ватан һағында

# Иҫән йөрөгөҙ, уландар!



*«Эйәрле ат беҙ менгәндәр, һау булығыҙ йән һөйгәндәр»*

***Ике аҙналыҡ отпуск күҙ асып йомған арала үтте лә китте, бер төркөм яҡташтарыбыҙ йәнә махсус хәрби операция зонаһына йүнәлде.***

15 апрель көнө иртәнге ваҡытта хәрби комиссариат янында оҙатыу тантанаһы ойоштрола. Яугирҙарыбыҙға иң яҡшы теләктәр менән район хакимиәте башлығы Руслан Ғиләзетдинов, ҡала һәм районДың хәрби комиссары Сергей Симоновтар телмәр тоттолар.

Өфөлә лә митинг үтә, мобилизацияланған һәм ирекмән батальондары һалдаттарын фронтҡа оҙаталар.

- Алғы һыҙатта булғанығыҙҙа булышлыҡ күрһәтәсәкбеҙ, һеҙ ситтә йөрөгәндә яҡындарығыҙ, ғаиләләрегеҙ тураһында хәстәрлек күрербеҙ. Был һорауҙар Радий Хәбировтың шәхси котролендә, - тип ышандырҙы БР Башлығы администрацияһы етәксеһе Максим Забелин.

...Ә саҡ ҡына алдараҡ, 12 апрелдә баш ҡаланан «Ватан» Башҡорт ирекмәндәр отряды хәрби әҙерлек үтергә оҙатылды. Әйткәндәй, ирекмәндәр формированиелары командирҙары инициатива менән сыҡҡан икән - республика яугирҙарын айырым мотоуҡсылар полкына туплау. «Был тәҡдимде хуплайбыҙ, булышлыҡ итәсәкбеҙ. Оборона министрлығы менән һөйләшеүҙәр алып барыласаҡ», - тип үҙ фекерен белдерҙе БР Башлығы Р.Ф. Хәбиров.

**Ирек САФИН.**

# Зәм-зәм һыуы ҡурсалар

***Иҫтамғол ауылы халҡы махсус хәрби операциянан ҡыҫҡа ваҡытлы ялға ҡайтҡан уландарына ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп, матур осрашыу сараһы ойошторҙо.***



*Ауыл көтә улдарын*

Осрашыуға әлеге ваҡытта яу ҡырындағы егеттәребеҙҙең ата-әсәләре лә саҡырылды. Егеттәрҙе клуб алдында икмәк, Мәккәнән килтерелгән зәм-зәм һыуы менән ҡаршылағандан һуң, ифтар мәжлесе үткәрҙек. Яугир егеттәребеҙ менән осрашыуға ауылдың олоһо-кесеһе йыйылды, һәр береһе уларға оло ихтирамын, рәхмәт һүҙҙәрен еткерергә теләне. Сара һуңында егеттәребеҙгә, уларҙың ата-әсәләре хөрмәтенә патриотик концерт ойошторолдо, Рәмил Ғимрановтың үҙе ижад иткән «Иҫтамғолом», «Атай», «Әсәйемә» йырҙары, Шәрифулла Таһировтың, Ринат Сөләймәновтың моңло, тыуған ауыл, тыуған ил, әсәй, атай тураһындағы йырҙары, Мөхәмәтов Ислам һәм Ғәзиз башҡарыуындағы «Һунарсы» бейеүе береһен дә битараф ҡалдырманы. Әминә Булычеваның йөрәктән сыҡҡан «Улыма» йырын башҡарыуын күҙ йәштәрһеҙ тыңлау мөмкин түгел ине.

Осрашыу бик тулҡынландырғыс булды, илаштыҡ та, йырлаштыҡ та, бөтәбеҙҙең дә теләк бер генә ине - тиҙерәк һуғыш бөтөп, егеттәребеҙ иҫән-һау тыуған яҡтарына, ата-әсәһе, ғаиләһе янына ҡайтһындар, Аллаһ бирһә.

Ошо сараны ойоштороуҙа әүҙем ҡатнашҡан, ярҙам иткән ауыл халҡына, ауылдан ситтә йәшәгән ауылдаштарға, йүгереп йөрөп матур табын әҙерләшкән «Әхирәттәр» фольклор коллективы ҡатын-ҡыҙҙарына ҙур рәхмәтемде белдерәм. Ифтар мәжлесен ойоштороуға һәр кем үҙ өлөшөн индерҙе, өҫтәлдәр һый-хөрмәттән һығылып торҙо, ауылда йәшәүселәр тәмле-тәмле ризыҡтар бешереп килтерһә, ауылдан ситтә йәшәүселәр аҡсалата ярҙам күрһәттеләр. Иҫтамғолдарға - афарин, шулай һәр ваҡыт берҙәм, дуҫ-татыу булайыҡ. Һәммәбеҙгә лә һаулыҡ, бәхетле оҙон ғүмер теләйем. Илдә тыныслыҡ урынлашып, егеттәребеҙ иҫән-һау ҡайтып, ҡыуаныста-шатлыҡта осрашырға яҙһын.

**Гөлсирә ҒӘЛИӘХМӘТОВА,**
**Иҫтамғол ауылы.**



# Был донъяла ниҙәр бар?

✓ Хәҙер күп функциялы үҙәктәрҙә лә (МФЦ) контракт буйынса һәм ирекле батальондарҙа хәрби хеҙмәт мәсьәләләре буйынса кәңәшләшергә мөмкин. Талаптар, килешеү төҙөү тәртибе, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға тейешле түләүҙәр, льготалар тураһында аңлатасаҡтар, «Дәүләт хеҙмәттәре» порталында шәхси кабинет аша ғариза бирергә ярҙам итәсәктәр. Шулай уҡ республикала 72 күсмә агитация пункттары асыла. Белешмә алыу өсөн телефон: 117, 8 (347) 218-19-19 һәм 122 (кеҫә телефонынан). Учалы ҡалаһында бындай пункттар филармония янында һәм «Ветеран» клубында асылды.

✓ Ырымбур ҡалаһында берәҙәк эт өйөрө 8 йәшлек баланы талап үлтерҙе, кейеме буйынса ғына таный алғандар! Әлбиттә, шундуҡ енәйәт эше ҡуҙғатыла, ҡала властары ғәйепле булып ҡаласаҡ. Ә бына берәҙәк эттәрҙе атыуҙы тыйған РФ Дәүләт Думаһындағы депутаттарыбыҙ ошондай яңылыҡтарҙы нисек ҡабул итә икән, ажар йыртҡыстар тағын да нисә кешене терелә́й өҙгөсләгәндән һуң закондарына үҙгәрештәр һәм төҙәтмәләр индерә башлар? Был яҙманы Учалыны, Башҡортостанды вәкилләгән бар депутаттар һайлаусы наказы итеп ҡабул итә ала - күптән сик ҡуйыр кәрәк!

✓ Алыш яланында еңә алмағас, Көнбайыш илебеҙ эсендә төрлөсә низағтар ҡуптарып аҙапланыр инде. Ниндәйҙер ҡәбәхәттәр Мәскәүҙә Ҡөрьән-Кәримде яндырғанды видеоға төшөрөп, интернет селтәрендә тараталар. «Көнбайыштағы Исламды түбәнһетеп маташыу тулҡыны Рәсәйгә килеп етте. Был провокация, мосолмандарға ла, православныйҙарға ла кәрәге юҡ», - тип комментарий бирҙе Чечня Башлығы Рамаҙан Ҡадиров. Эйе, провокация, яуыз ниәттә талаш сығарырға ынтылыу. Мәскәү полицияһы шундуҡ енәйәт эше ҡуҙғатты.

✓ Әрмәндәр ҙә һуғыш яланында әзербайжандарҙан еңелгән ине, тик һаман еңмешлектәренә баш була алмайҙар. Ереванда ауыр атлетика буйынса Европа чемпионаты үткәрелә. Бөтә ҡатнашҡан илдәр флагтарын күтәреп сыға. Тантанаға рәсми рәүештә саҡырылған Арам Николян атлы бәндәнең Әзербайжан флагы тотҡан ҡыҙға көсө етә - байраҡты ҡулынан тартып алып сәхнә ситенә йүгерә лә, күрше дәүләт символына ут үртәй. Иң аянысы - полиция Николянды тотоуын тота, әммә шундуҡ ебәрәләр - йәнәһе лә енәйәт башҡармаған. Бөгөн шундай милли геройҙарға көндәре ҡалғандыр инде!

✓ Үткән шәмбе телевизорҙан «Мөғжизәләр яланы» тамашаһын ҡаранығыҙмы? Килешеп торған милли кейемдә башҡорт егете төп еңеүсе булды. Мәскәүҙең «Аҡ тирмә» башҡорт фольклор коллективы солистары Лилиә һәм Ринат Хәбировтар Мәсетле районында тыуып үҫкән. Мәскәүҙә йәшәгән яҡташтарыбыҙ милли йыр-бейеү сәнғәтен пропагандалай. Был тапҡыр Ринат «Ҡара юрға»ны башҡара, Лилиә бейей. Әсәһе менән ваҡ бәлеш бешергән, Леонид Якубовичҡа ҡурай ҙа бүләк итәләр. Әлбиттә, йырлап-бейеп кенә еңеп булмай, Ринат үҙен бик зирәк һәм оҫҡор ҙа итеп күрһәтте. «Стаканник» пирогы (бар ингридиенттар берәр стакан алынғас шулай атала) тураһында быға тиклем ишеткәне лә булмағандыр, әммә башы шәп эшләгәс, дөрөҫ яуапты таба алды. Кухня йыһаздары, аҡса отто. Ғорурланып ҡараныҡ!

✓ Ахыры заманды саманан тыш бирелеп көтә башлаһаң, килә лә етә ул - тик һәр кем өсөн айырым, шәхсән рәүештә. Кенияла 4 кеше асығып үлде, тағын да 10 кеше ауыр хәлдә дауаханаға илтелә. Баҡһаң, Пол Маккензи тигән дин әһеле шәрәмәте йәнә Ғайса пәйғәмбәр килә, мәңгелек ғүмергә ирешер өсөн асығып таҙарыр кәрәк, тип өндәй икән. Ул үҙе март айында уҡ ҡулға алынған - быға тиклем дә ике баланы асыҡтырып үлтергән, тип ғәйепләнә.

✓ Нью-Йоркта сама менән 2 миллион ҡомаҡ иҫәпләнә икән, артабан үрсейҙәр. Шуға ла ҡала тарихында тәү тапҡыр яңы вазифа булдырылды - Ҡомаҡтар менән көрәш буйынса директор. Элекке уҡытыусы Кэтлин Корради тәғәйенләнә. Мәктәптәрҙе был йәнлектәрҙән таҙартыу буйынса апаруҡ тәжрибәгә эйә икән. Йылына 155 мең доллар эш хаҡы аласаҡ, беҙҙең аҡсаға 12-13 миллион һум.

✓ Көньяҡ Корея ла, 350 мең йәш кеше урамға сығырға ла ҡурҡып, йә оялып өйҙә яңғыҙы ултыра, ти. Кеше менән аралашырға өйрәтеү өсөн хөкүмәт 650 мең вон (40 мең һум) пособие түләй башлай. Спорт инветары, кейем-һалым алыу йә ҡиәфәттәрен үҙгәртеү маҡсатында. Йәштәр үҙҙәренең ҡәҙимге йөҙҙәренән, буй-һындарынан ғәрләнәләр, ти! Пластик хирургтар ҡулына эләрер алдынан, башта төшөндөрөргә ине - Аллаһы Тәғәлә яралтҡас, һәр әҙәм балаһы ла үҙенсә матур, үҙенә генә хас рәүештә һөйкөмлө! Ниндәйҙер стандарттарға тура килмәйбеҙ инде, беҙ бит инкубатор себештәре түгел.

✓ РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы коронавирусҡа ҡаршы яңы, 6-11 йәшлек балаларға тәғәйен вакцинаны теркәне.

**Үҙәк матбуғатты һәм интернетты файҙаланып,**
**Илфат ЯНБАЕВ әҙерләне.**

Башҡортостанская информационная компания **Бөгөн республикала** мөһим • ҡыҙыҡлы • файҙалы

# Башҡортостанда талпандар уянды. Был бөжәктән нисек һаҡланырға?

***Яҙҙың иртә килеүе сәбәпле быйыл талпандар йылдағыға ҡарағанда иртәрәк уянды. Апрелдең тәүге көндәрендә табиптарға ҡан эскес бөжәк эләктергән иллеләп кеше мөрәжәғәт иткән, улар араһында балалар ҙа бар. Былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда зыян күреүселәр һаны һигеҙ тапҡырға артҡан.***



Башҡортостан Республикаһында Гигиена һәм эпидемиология үҙәге мәғлүмәттәре буйынса.

### НИНДӘЙ УРМАНДА ХӘҮЕФЛЕРӘК?

Йыл һайын табиптарға талпан ҡаҙалыуға бәйле 10 меңдән 20 меңгә тиклем кеше мөрәжәғәт итә. Иң ҡурҡынысы – талпандар сәләмәтлеккә ҙур хәүеф менән янаған сирҙәрҙе таратыуы ихтимал. Шулар иҫәбендә – талпан энцефалиты һәм боррелиоз (Лайм сире). Статистикаға ярашлы, талпан тешләгән 100 кешенең унауһында энцефалит осрағы асыҡлана. Сир үҙәк нервы системаһын зарарлай. Бәләкәй генә ҡан эскес бөжәк арҡаһында кешене фалиж һуғыуы, ул ғүмерлеккә инвалид булып ҡалыуы, хатта үлеүе бар.

Былтыр табиптар Башҡортостанда талпан энцефалиты йоҡтороуҙың 28 осрағын асыҡланы, был алдағы йылға ҡарағанда 12 осраҡҡа күберәк. Сирләүселәрҙең етәүһе – 17 йәшкә тиклемге балалар. Күңелһеҙ осраҡтар республиканың ун районында теркәлгән. Зыян күреүселәрҙең күбеһе – Белорет районынан. 12 кеше! Ҡыйғы, Салауат, Дыуан райондарында – икешәр, Балтаста һәм Ҡариҙелдә берешәр осраҡ теркәлгән.

### Ә БЫЛ ВАҠЫТТА...

**Төбәктә сысҡан биҙгәгенең көсәйеүен фаразлайҙар**

Республикала сысҡан биҙгәге менән сирләүгә бәйле хәл көсөргәнешле ҡала. Өфө, Благовещен, Йәрмәкәй һәм Мишкә райондары халҡына айырыуса иғтибарлы булырға кәрәк. Был төбәктәрҙә сирләүселәр һаны республика буйынса уртаса күрһәткестән ике тапҡырға күберәк. Былтыр Башҡортостанда өс мең кеше сысҡан биҙгәге йоҡторған, уларҙың 40 проценты – балалар.

Ауырыуҙың төп таратыусылары – сысҡандар. Шуға күрә ихаталарҙы санитар таҙартыу, кимереүселәргә ҡаршы көрәш алып барыу, шәхси гигиена ҡағиҙәләрен үтәү мөһим. Асыҡ һыу ятҡылыҡтарынан алынған һыуҙы ҡайнатмайынса ҡулланмағыҙ, кимереүселәр зарарлаған аҙыҡ-түлекте ашамағыҙ, ашар алдынан ҡулдарҙы йыуығыҙ, үлән һәм һалам кеүек нәмәләрҙе ауыҙығыҙға ҡапмағыҙ.

### ЭНЦЕФАЛИТТАН НИСЕК ҺАҠЛАНЫРҒА?

Талпан ҡаҙалыуҙан һаҡланыу саралары бихисап, ә бына энцефалиттан һаҡланыуҙың иң ышаныслы алымы – прививка. Ул өс этапта эшләнә, тәүгеһен ҡышҡыһын йәки иртә яҙҙа эшләтеү һәйбәтерәк, сөнки был осраҡта талпандар әүҙемләшеүгә иммунитет барлыҡҡа килеп өлгөргән була. Беренсе һәм икенсе прививка араһы 5-7 ай тәшкил итергә тейеш. Өсөнсө прививканы тәүгеһен яһатыуға бер йыл тигәндә эшләйҙәр. Артабан һәр өс йыл һайын ревакцинация талап ителә. Ошо ғәҙәти вакцинацияны ваҡытында эшләтмәгәндәр, тәбиғәткә йыш сыҡҡан осраҡта, ашығыс вакцинация яһата ала. Ул яҙғыһын һәм йәйгеһен эшләнә. Бындай прививка ике этаптан тора, икәүһененең араһындағы ваҡыт 1-2 ай тәшкил итә. Был курсты тәбиғәткә сығыуҙан ике аҙна алда тамамлау зарур.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: прививка зарарланыуҙан 100 процентка һаҡламай. Әммә сир йоҡторған осраҡта ул күпкә еңелерәк һәм ауыр эҙемтәләрһеҙ үтәсәк.

Тағы ла шуны белергә кәрәк: прививка энцефалиттан ғына һаҡлай, мәҫәлән, боррелиозға уның тәьҫире юҡ. Шуға күрә һаҡсыллыҡ ҡағиҙәләрен онотоорға ярамай.

### ТАЛПАН ҠАҘАЛҺА, НИМӘ ЭШЛӘРГӘ?

Талпан ҡаҙалһа, уны тәнегеҙҙән тартып алмағыҙ. Иң яҡшыһы – травматология пунктына барып алдырыу, үҙең менән ҡан һурғыс бөжәкте һалырға ҡулай һауыт та алығыҙ. Ундағы белгестәр талпанды барлыҡ ҡағиҙәләргә ярашлы һурып сығарасаҡ. Әммә, 12 сәғәт эсендә табипҡа барып етә алмауығыҙҙы аңлаһағыҙ, уҙаллы эш итергә тура киләсәк. Бөжәктән ни тиклем иртәрәк ҡотолһағыҙ, шул тиклем яҡшыраҡ, сөнки ул зарарлы шыйыҡсаһын һеҙҙең организмға ебәреп өлгөрмәйәсәк.

Бер ҡасан да талпан өҫтөнә май ҡоймағыҙ! Ул тонсоға башлап, үҙе сығасаҡ, тигән хәбәр – уйҙырма. Киреһенсә, май арҡаһында ҡуҙғыған талпан тирегә ныҡыраҡ ҡаҙала башлай. Пинцет алығыҙ (был инструментты үҙегеҙ менән походҡа, сәйәхәткә лә алып йөрөгөҙ), бөжәктең мөмкин тиклем күберәк өлөшөн эләктереп, һаҡ ҡына борғолап, өҫкә табан тартығыҙ. Төп бурыс – ҡанэскескә зыян килтермәү. Томшоғо тороп ҡалһа, инфекция йоҡтороу дауам итә. Өҫтәүенә анализға тере талпанды алып барыу яҡшыраҡ, шулай уның ауырыу таратыусымы-юҡмы икәнен асыҡлау еңелерәк.

Әгәр талпан энцефалиты вирусы асыҡланһа, зыян күреүсегә иммуноглобулин яһарға кәрәк, боррелиоз асыҡланһа – табип антибиотиктар тәғәйенләй. Ваҡытында башланған дауалау фажиғәле эҙемтәләрҙән ҡотолорға ярҙам итәсәк.

### НИНДӘЙ БИЛДӘЛӘР ҺАҒАЙТЫРҒА ТЕЙЕШ?

Әгәр вайымһыҙлыҡ күрһәтеп, ҡаҙалған талпанды үҙегеҙ алып ташлап, табипҡа мөрәжәғәт итмәһәгеҙ, организмығыҙға иғтибарлы булығыҙ. Талпан энцефалитының билдәләре 25 көн дауамында беленмәскә мөмкин, әммә күп осраҡта сирҙең билдәләре беренсе йәки икенсе аҙнала уҡ күренә башлай. Юғары температура, күңел болғаныу, ҡоҫоу, баш ауыртыу, быуындар, мускулдар һәм тамаҡ ауыртыу, эҫ китеү, ҡан китеү – ошо билдәләр ҡуҙәтелһә, шунда уҡ табипка мөрәжәғәт итегеҙ. Уҙаллы дауаланыу насар тамамланыуы ихтимал.

**Талпандарҙы ҡайҙа тикшереүгә ҡабул итәләр**

**Өфө**
Шәфиев урамы, 7-се йорт. Телефондар: 8(347)287-85-23, 8-927-236-32-61.
Карл Маркс урамы, 69-сы йорт. Телефон: 8(347)269-69-69.

**Бөрө**
Калинин урамы, 18-се йорт. Телефондар: 8(34784)3-47-87, 8(34784)3-47-89.

**Нефтекама**
Социалистик урамы, 10-сы йорт. Телефондар: 8(34783)4-43-15, 8-917-370-24-44.

**Стәрлетамаҡ**
Революция урамы, 2 а йорт. Телефон: 8 (3473) 30-13-34.

**Мәсәғүт**
Дауахана урамы, 4-се йорт. Телефондар: 8(34798)3-35-90, 8(34798)3-35-93.

**Туймазы**
Урмансы Морозов урамы, 1-се йорт. Телефондар: 8(34782)7-25-96, 8(34782)7-45-66.

**Күмертау**
Ғафури урамы, 29-сы йорт. Телефондар: 8(34761)4-37-67, 8(937)857-12-48.

Материалдар БР «Башҡортостан Республикаһы» нәшриәт йорто ДУП-ы редакцияһы тарафынан әҙерләнде. Мәҡәләләр буйынса тәҡдимдәрегеҙҙе axmetshina.v@rbsmi.ru адресы йәки (347) 272-92-61 телефоны аша еткерә алаһығыҙ.

podpiska.pochta.ru

## Понедельник 24

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 «Доброе утро» (0+)
09.00, 12.00, 15.00, 18.00, 03.00 Новости
09.20 «АнтиФейк» (16+)
09.55 «Жить здорово!» (16+)
10.45, 12.15, 15.15, 16.50, 18.20 «Информационный канал» (16+)
16.00 «Мужское / Женское» (16+)
19.50 «Куклы наследника Тутти» (16+)
21.00 Время
21.45 Т/с «По законам военного времени» (12+)
22.40 «Большая игра» (16+)
23.40 Подкаст.Лаб «Астро-Умные» (16+)
00.20 Подкаст.Лаб «Пусть не говорят, пусть читают» (16+)

### РОССИЯ

05.00, 09.30 «Утро России»
09.00, 14.30, 21.05 Вести. Местное время
09.55 «О самом главном». Ток-шоу (12+)
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести
11.30, 17.30 «60 Минут» Ток-шоу (12+)
14.55 «Кто против?» Ток-шоу (12+)
16.30 «Малахов» (16+)
21.20 Т/с «Дорога к счастью» (12+)
23.25 «Вечер с Владимиром Соловьёвым» (12+)

### УТВ

06.00 Тележурнал 12+
07.00 Мультимир 0+
08.00 Обзор событий недели (повтор от 23.04.23)
08.45 Первые в мире (15с) 12+
09.00 Д/ф «Национальная кухня. Помнят ли гены, что мы есть?» 12+
10.00 Песня в подарок 12+
11.00 Портреты. А. Миронов Держась за облака 12+
12.00 Т/с «Простая жизнь» (10с) 12+
13.00 Обзор событий недели (повтор от 23.04.23)
13.45 Т/с «Первые в мире» (16с) 12+
14.00 Т/с «Наследники» (35с) 12+
15.00 Т/с «Наследники» (36с)
16.00 Профилактические работы
17.00 Тележурнал 12+
19.00 Песня в подарок 12+
19.35 Мультфильм 0+
19.45 Формула здоровья (о значение диспансеризации рассказывает Кагарманова Г. Г. фельдшер отделения профилактики ЦГБ 12+
20.10 Фильм «15 месяцев без детства» 2020 (ф35) 12+
21.00 Т/с «Восток-Запад» (10с) 12+
23.00 Т/с «Восток-Запад» (11с) 12+
00.00 Т/с «Восток-Запад» (12с)

### НТВ

04.40 Т/с «Пляж. Жаркий сезон» (16+)
06.30 «Утро. Самое лучшее» (16+)
08.00, 10.00, 13.00, 16.00, 19.00, 23.35 Сегодня
08.25, 10.35 Т/с «Морские дьяволы. Смерч» (16+)
13.30 «Чрезвычайное происшествие» (16+)
14.00 «Место встречи» (16+)
16.45 «За гранью» (16+)
17.50 «ДНК» (16+)
20.00 Т/с «Невский. Расплата за справедливость» (16+)
22.15, 00.00 Т/с «Фальшивый флаг» (16+)
00.55 Т/с «Алекс Лютый» (16+)

### РЕН ТВ

05.00, 18.00, 02.05 «Самые шокирующие гипотезы» (16+)
06.00 «С бодрым утром!» (16+)
08.30, 12.30, 16.30, 19.30, 23.00 Новости (16+)
09.00 «Военная тайна» (16+)
11.00 «Как устроен мир» (16+)
12.00, 16.00, 19.00 «Информационная программа 112» (16+)
13.00 «Загадки человечества» (16+)
14.00 «Невероятно интересные истории» (16+)
15.00 Д/п «Засекреченные списки» (16+)
17.00, 02.55 «Тайны Чапман» (16+)
20.00 Х/ф «Святым тут не место» (18+)
22.00 «Водить по-русски» (16+)
23.30 Документальный спецпроект (16+)
00.30 Х/ф «Кровный отец» (18+)

### СТС

06.00, 05.50 «Ералаш» (0+)
07.00 М/с «Лунтик» (0+)
08.00 «Битва каверов» (16+)
10.00 Х/ф «Лев Яшин. Вратарь моей мечты» (6+)
12.25 Т/с «Ивановы-Ивановы» (12+)
14.35, 19.00, 19.30 Т/с «Против всех» (16+)
20.00 «Фактор страха. Испытание тайгой» (16+)
20.50 Х/ф «Последний охотник на ведьм» (16+)
22.50 Х/ф «Телекинез» (16+)
00.50 «Кино в деталях с Фёдором Бондарчуком» (18+)
01.45 «Импровизаторы» (16+)
02.35 Т/с «Последний из Магикян» (12+)

### ТНТ

07.00, 06.50 «Однажды в России. Спецдайджест» (16+)
09.00 Т/с «Универ» (16+)
15.00 Т/с «Жуки» (16+)
18.00 Т/с «Ольга» (16+)
21.00 Х/ф «Друг на час» (16+)
22.00 «Женский Стендап. Дайджесты-2022» (16+)
23.00 «Шоу Воли» (16+)
00.00 Х/ф «День города» (16+)
01.45 «Такое кино!» (16+)
02.10 «Импровизация. Команды» (16+)
03.40 Шоу «Студия «Союз» (16+)
05.15 «Открытый микрофон»

### БСТ

07.00 «Салям».
10.00 «Байык-2023». Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. I тур (12+)
11.00 Новости недели
11.45 Интервью (12+)
12.00 Спортивная история (12+)
12.30 Новости (на рус.яз.)
12.45 Счастливый час
13.30 Новости (на баш.яз.)
13.45 Бахетнама
14.30 Новости (на баш.яз.)
14.45 Интервью (12+)
15.00 Нурбостан сэйэхэте (6+)
15.30 Гора новостей (6+)
15.45 Преград. net (6+)
16.00 Интервью (12+)
16.30 Новости (на рус.яз.)
16.45 Интервью (12+)
17.00 Республика LIVE #дома (12+)
17.30 Новости (на рус.яз.)
17.45 Специальный репортаж (12+)
18.00 «Бай». Программа о развитии малого предпринимательства на селе (12+)
18.30 Новости (на баш.яз.)
19.00 Вечерний телецентр
20.00 Сэнгелдэк (0+)
20.15 Пофутболим? (12+)
20.30 Вечерний телецентр
21.30 Новости (на рус.яз.)
22.00 Тайм-аут (12+)
22.30 Новости (на баш.яз.)
23.00 «Я ушла на войну». Документальный фильм «АНО ТВ-Новости». (16+)
00.00 Бахетнама (12+)

## Вторник 25

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 «Доброе утро» (0+)
09.00, 12.00, 15.00, 18.00, 03.00 Новости
09.20 «АнтиФейк» (16+)
09.55 «Жить здорово!» (16+)
10.45, 12.15, 15.15, 16.50, 18.20 «Информационный канал» (16+)
16.00 «Мужское / Женское» (16+)
19.50 «Куклы наследника Тутти» (16+)
21.00 Время
21.45 Т/с «По законам военного времени» (12+)
22.45 «Большая игра» (16+)
23.45 Подкаст.Лаб «Легкие деньги» (16+)
00.25 Подкаст.Лаб «Креативные индустрии» (16+)
01.10 Подкаст.Лаб «Произвольная программа» (16+)
01.55 Подкаст.Лаб «Письма» (16+)
02.40, 03.05 Подкаст.Лаб «Мелодии моей жизни» (16+)

### РОССИЯ

05.00, 09.30 «Утро России»
09.00, 14.30, 21.05 Вести. Местное время
09.55 «О самом главном». Ток-шоу (12+)
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести
11.30, 17.30 «60 Минут» Ток-шоу (12+)
14.55 «Кто против?» Ток-шоу (12+)
16.30 «Малахов» (16+)
21.20 Т/с «Дорога к счастью» (12+)
23.25 «Вечер с Владимиром Соловьёвым» (12+)
02.05 Т/с «Дуэт по праву» (12+)
03.55 Т/с «Пыльная работа»

### УТВ

06.00 Тележурнал 12+
07.00 Мультимир 0+
08.00 Один день в городе. Владикавказ 12+
08.30 Библейский сюжет (ф8) 12+
09.00 Д/ф «Эдмонд Кеосаян. Не только «Неуловимые» 12+
09.55 И в шутку, и всерьёз 12+
10.00 Песня в подарок 12+
11.00 Портреты. Любовь Успенская 12+
12.00 Т/с «Простая жизнь» (11с) 12+
13.00 Дело № (39с) 12+
13.30 Радуга 12+
14.00 Т/с «Наследники» (37с)
15.00 Т/с «Наследники» (3с) 12+
16.00 Д/ф «Победоносец». Фильм А. Мамонтова 12+
17.00 Тележурнал 12+
19.00 Песня в подарок 12+
19.35 Мультфильм 0+
20.00 Радуга 12+
20.30 Время новостей
21.00 Т/с «Восток-Запад» (13с) 12+
22.00 Один день в городе. Владикавказ 12+
22.30 Время новостей
23.00 Х/ф «Праздничный переполох» 16+
01.00 Д/ф «Победоносец». Фильм А.Мамонтова 12+

### НТВ

04.35 Т/с «Пляж. Жаркий сезон» (16+)
06.30 «Утро. Самое лучшее» (16+)
08.00, 10.00, 13.00, 16.00, 19.00, 23.35 Сегодня
08.25, 10.35 Т/с «Морские дьяволы. Смерч» (16+)
13.30 «Чрезвычайное происшествие» (16+)
14.00 «Место встречи» (16+)
16.45 «За гранью» (16+)
17.50 «ДНК» (16+)
20.00 Т/с «Невский. Расплата за справедливость» (16+)
22.15, 00.00 Т/с «Фальшивый флаг» (16+)
00.55 Т/с «Алекс Лютый» (16+)

### РЕН ТВ

05.00, 18.00, 02.25 «Самые шокирующие гипотезы» (16+)
06.00 «С бодрым утром!» (16+)
08.30, 12.30, 16.30, 19.30, 23.00 Новости (16+)
09.00 «Военная тайна» (16+)
10.00 «Совбез» (16+)
11.00 «Как устроен мир» (16+)
12.00, 16.00, 19.00 «Информационная программа 112» (16+)
13.00 «Загадки человечества» (16+)
14.00 «Невероятно интересные истории» (16+)
15.00 Д/п «Засекреченные списки» (16+)
17.00, 03.10 «Тайны Чапман» (16+)
20.00 Х/ф «Наемник» (16+)
22.00 «Водить по-русски» (16+)
23.30 «Знаете ли вы, что?» (16+)
00.30 Х/ф «Подарок» (16+)

### СТС

06.00, 05.50 «Ералаш» (0+)
07.00 М/с «Лунтик» (0+)
08.00, 18.30, 19.00, 19.30 Т/с «Против всех» (16+)
09.00 «Уральские пельмени.
Смехbook» (16+)
09.40, 20.00 «Большой побег» (16+)
12.30 Т/с «Ивановы-Ивановы» (12+)
21.05 Х/ф «Пассажир» (16+)
23.15 Х/ф «Воздушный маршал» (12+)
01.15 Х/ф «Ярость» (18+)

### ТНТ

07.00, 06.35 «Однажды в России. Спецдайджест» (16+)
08.30 «Бьюти баттл» (16+)
09.00 Т/с «Универ» (16+)
15.00 Т/с «Жуки» (16+)
18.00 Т/с «Ольга» (16+)
21.00 Х/ф «Друг на час» (16+)
22.00 «Женский Стендап. Дайджесты-2022» (16+)
23.00 «Музыкальная интуиция» (16+)
01.00 «Импровизация. Команды» (16+)

### БСТ

07.00 «Салям»
10.00 «Ете егет». Реалити-шоу (12+)
10.45 Надо знать. Лампы накаливания (12+)
11.00 «Дорога к храму» (0+)
11.30 Новости (на рус.яз.)
11.45 Интервью (12+)
12.00 Моя планета Башкортостан (12+)
12.30 Новости (на рус.яз.)
12.45 Счастливый час
13.30 Новости (на баш.яз.)
13.45 Бахетнама
14.30 Новости (на баш.яз.)
14.45 Интервью (12+)
15.00 Детей много не бывает (6+)
15.30 Гора новостей (6+)
15.45 «Кош юлы. Балалар» (6+)
16.00 «Дорога к храму». Православная религиозная программа (0+)
16.30 Новости (на рус.яз.)
16.45 Интервью (12+)
17.00 «Автограф». (12+)
17.30 Новости (на рус.яз.)
17.45 Криминальный спектр (16+)
18.00 Елкэн (6+)
18.30 Новости (на баш.яз.)
19.00 Брифинг
20.00 Сэнгелдэк (0+)
20.15 Полезные новости (12+)
20.30 Вечерний телецентр
21.30 Новости (на рус.яз.)
22.00 Республика LIVE #дома (12+)
22.30 Новости (на баш.яз.)
23.00 Атлас Баженова. Башкортостан (12+)
23.30 Бахетнама (12+)

## Среда 26

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 «Доброе утро» (0+)
09.00, 12.00, 15.00, 18.00, 03.00 Новости
09.20 «АнтиФейк» (16+)
09.55 «Жить здорово!» (16+)
10.45, 12.15, 15.15, 16.50, 18.20 «Информационный канал» (16+)
16.00 «Мужское / Женское» (16+)
19.50 «Куклы наследника Тутти» (16+)
21.00 Время
21.45 Т/с «По законам военного времени» (12+)
22.45 «Большая игра» (16+)
23.45 Подкаст.Лаб «Письма» (16+)
00.25 Подкаст.Лаб «Триггеры» (16+)
01.10 Подкаст.Лаб «Астро-Умные» (16+)
01.55 Подкаст.Лаб «Пусть неговорят, пусть читают» (16+)

### РОССИЯ

05.00, 09.30 «Утро России»
09.00, 14.30, 21.05 Вести. Местное время
09.55 «О самом главном». Ток-шоу (12+)
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести
11.30, 17.30 «60 Минут» Ток-шоу (12+)
14.55 «Кто против?» Ток-шоу (12+)
16.30 «Малахов» (16+)
21.20 Т/с «Дорога к счастью» (12+)
23.25 «Вечер с Владимиром Соловьёвым» (12+)
02.05 Т/с «Дуэт по праву» (12+)

### УТВ

06.00 Тележурнал 12+
07.00 Мультимир 0+
07.30 Время новостей
08.00 Премьера детской программы «Дневник улитки»
08.30 Время новостей
09.00 Фильм «Сеянтус» 12+
09.45 Фольклорный ансамбль «Хазина» обряд имянаречения 12+
10.00 Песня в подарок 12+
11.00 Музыкальная программа 12+
12.00 Т/с «Простая жизнь» (11с) 12+
13.00 Фильм «Песни спетые сердцем» (А. Султанов) 12+
13.30 Время новостей
14.00 Х/ф «Сэк-сэк» 12+
15.45 Фильм «Асия» 12+
16.00 Выступление группы «Далан» в Учалах 12+
17.00 Тележурнал 12+
19.00 Песня в подарок 12+
19.35 Фильм телестудии «Тамыр» Страна поющих цветов (ф8) 2019 0+
20.00 Праздник родного языка в Ильчинской школе 0+
20.30 Время новостей
21.00 Спектакль Сибайского драмтеатра им. А. Мубарякова «Мечтатель» 12+
22.30 Время новостей
23.00 Юмористическая программа «Ин якшы» (2009г) (ф1 и 3) 16+
00.00 Концерт Государственного ансамбля танца им. Ф. Гаскарова в Учалах (2013г) 12+

### НТВ

04.35 Т/с «Пляж. Жаркий сезон» (16+)
06.30 «Утро. Самое лучшее» (16+)
08.00, 10.00, 13.00, 16.00, 19.00, 23.35 Сегодня
08.25, 10.35 Т/с «Морские дьяволы. Смерч» (16+)
13.30 «Чрезвычайное происшествие» (16+)
14.00 «Место встречи» (16+)
16.45 «За гранью» (16+)
17.50 «ДНК» (16+)
20.00 Т/с «Невский. Расплата за справедливость» (16+)
22.15, 00.00 Т/с «Фальшивый флаг» (16+)
00.55 Т/с «Алекс Лютый» (16+)

### РЕН ТВ

05.00, 18.00, 02.25 «Самые шокирующие гипотезы» (16+)
06.00, 08.30, 12.30, 16.30, 19.30, 23.00 Новости (16+)
06.05 «С бодрым утром!» (16+)
09.00, 15.00 Д/п «Засекреченные списки» (16+)
11.00 «Как устроен мир» (16+)
12.00, 16.00, 19.00 «Информационная программа 112» (16+)
13.00, 23.30 «Загадки человечества» (16+)
14.00 «Невероятно интересные истории» (16+)
17.00, 03.10 «Тайны Чапман» (16+)
20.00 Х/ф «Паранойя» (16+)
22.00 «Смотреть всем!» (16+)
00.30 Х/ф «Саботаж» (18+)

### СТС

06.00, 05.50 «Ералаш» (0+)
07.00 М/с «Лунтик» (0+)
08.00, 18.30, 19.00, 19.30 Т/с «Против всех» (16+)
09.00 «Уральские пельмени.
Смехbook» (16+)
10.20 Х/ф «Пассажир» (16+)
12.20 Т/с «Ивановы-Ивановы» (12+)
20.00 Х/ф «Телепорт» (16+)
21.45 Х/ф «Новые мутанты» (16+)
23.35 Х/ф «Последний охотник на ведьм» (16+)
01.35 Т/с «Последний из Магикян» (12+)

### ТНТ

07.00, 06.35 «Однажды в России. Спецдайджест» (16+)
08.30 «Модные игры» (16+)
09.00 Т/с «Универ» (16+)
15.00 Т/с «Жуки» (16+)
18.00 Т/с «Ольга» (16+)
21.00 Х/ф «Друг на час» (16+)
22.00 «Женский Стендап. Дайджесты-2022» (16+)
23.00 Шоу «Конфетка» (16+)
01.00 «Импровизация. Команды» (16+)

### БСТ

07.00 «Салям»
10.00 Тамле. Мы вместе! (12+)
10.30 История одного села. с. Дингезбаево Самарская область (12+)
10.45 Эллэсе... (6+)
11.30 Новости (на рус.яз.)
11.45 Интервью (12+)
12.00 Дознание (12+)
12.15 Пофутболим? (12+)
12.30 Новости (на рус.яз.)
12.45 Счастливый час
13.30 Новости (на баш.яз.)
13.45 Бахетнама
14.30 Новости (на баш.яз.)
14.45 Интервью (12+)
15.00 МузКэрэз (6+)
15.30 Гора новостей (6+)
15.45 «КультУра». Медиасеть школьных студий (6+)
16.00 Тайм-аут (12+)
16.30 Новости (на рус.яз.)
16.45 Интервью (12+)
17.00 Республика LIVE #дома (12+)
17.30 Новости (на рус.яз.)
17.45 История одного села. д. Второе Юмагузино Оренбургской области (12+)
18.00 Тормош. Дер.Нижнехозятово, Чишминский район (12+)
18.30 Новости (на баш.яз.)
19.00 Вечерний телецентр
20.00 Сэнгелдэк (0+)
20.15 Полезные новости (12+)
20.30 Вечерний телецентр
21.30 Новости (на рус.яз.)
22.00 Историческая среда (12+)
22.30 Новости (на баш.яз.)
23.00 Автограф. Баязит Галимов
23.30 Бахетнама (12+)

## Четверг 27

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 «Доброе утро» (0+)
09.00, 12.00, 15.00, 18.00, 03.00 Новости
09.20 «АнтиФейк» (16+)
09.55 «Жить здорово!» (16+)
10.45, 12.15, 15.15, 16.50, 18.20 «Информационный канал» (16+)
16.00 «Мужское / Женское» (16+)
19.50 «Куклы наследника Тутти» (16+)
21.00 Время
21.45 Т/с «По законам военного времени» (12+)
22.45 «Большая игра» (16+)
23.45 Подкаст.Лаб «Космические истории» (16+)
00.25 Подкаст.Лаб «Собрались с мыслями» (16+)
01.10 Подкаст.Лаб «Креативные индустрии» (16+)
01.55 Подкаст.Лаб «Легкие деньги» (16+)

### РОССИЯ

05.00, 09.30 «Утро России»
09.00, 14.30, 21.05 Вести. Местное время
09.55 «О самом главном». Ток-шоу (12+)
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести
11.30, 17.30 «60 Минут» Ток-шоу (12+)
14.55 «Кто против?» Ток-шоу (12+)
16.30 «Малахов» (16+)
21.20 Т/с «Дорога к счастью» (12+)
23.25 «Вечер с Владимиром Соловьёвым» (12+)
02.00 45-й Московский Международный кинофестиваль. Торжественное закрытие

### УТВ

06.00 Тележурнал 12+
07.00 Мультимир 0+
07.30 Время новостей
08.00 Один день в городе. Краснодар 12+
08.30 Время новостей
09.00 Т/с «День расплаты» (1с) 16+
10.00 Песня в подарок 12+
11.00 Портреты. Людмила Зыкина 12+
12.00 Т/с «Простая жизнь» (13с) 12+
13.00 Дело № (40с) 12+
13.30 Время новостей
14.00 Т/с «Наследники» (41с) 12+
15.00 Т/с «Наследники» (42с)
16.00 Д/ф «Романовы. Судьба русского Крыма» (1с) 12+
17.00 Тележурнал 12+
19.00 Песня в подарок 12+
19.45 Непоседы 0+
20.00 Д/ф «Рожденный дважды» (И. Зарипов) 12+
20.30 Время новостей
21.00 Т/с «Восток-Запад» (14с) 12+
22.00 Один день в городе. Краснодар 12+
22.30 Время новостей
23.00 Т/с «В бегах» (1с) 12+
00.00 Т/с «В бегах» (2с) 12+

### НТВ

04.45 Т/с «Пляж» (16+)
06.30 «Утро. Самое лучшее» (16+)
08.00, 10.00, 13.00, 16.00, 19.00, 23.35 Сегодня
08.25, 10.35 Т/с «Морские дьяволы. Смерч» (16+)
13.30 «Чрезвычайное происшествие» (16+)
14.00 «Место встречи» (16+)
16.45 «За гранью» (16+)
17.50 «ДНК» (16+)
20.00 Т/с «Невский. Расплата за справедливость» (16+)
22.15, 00.00 Т/с «Фальшивый флаг» (16+)
00.55 «Поздняков» (16+)
01.10 «Мы и наука. Наука и мы» (12+)
02.10 «Основано на реальных событиях» (16+)

### РЕН ТВ

05.00, 18.00, 02.05 «Самые шокирующие гипотезы» (16+)
06.00 «С бодрым утром!» (16+)
08.30, 12.30, 16.30, 19.30, 23.00 Новости (16+)
09.00 Д/п «Засекреченные списки» (16+)
11.00 «Как устроен мир» (16+)
12.00, 16.00, 19.00 «Информационная программа 112» (16+)
13.00, 23.30 «Загадки человечества» (16+)
14.00 «Невероятно интересные истории» (16+)
15.00 «Неизвестная история» (16+)
17.00, 02.50 «Тайны Чапман» (16+)
20.00 Х/ф «Закатать в асфальт» (18+)
00.30 Х/ф «Барракуда» (18+)

### СТС

06.00, 05.50 «Ералаш» (0+)
07.00 М/с «Лунтик» (0+)
08.00, 18.30, 19.00, 19.30 Т/с «Против всех» (16+)
09.00 «Уральские пельмени.
Смехbook» (16+)
10.10 Х/ф «Воздушный маршал» (12+)
12.20 Т/с «Ивановы-Ивановы» (12+)
20.00 Х/ф «Шпион по соседству» (12+)
21.55 Х/ф «Смокинг» (12+)
23.55 Х/ф «Двадцать одно» (16+)
02.10 Т/с «Последний из Магикян» (12+)
05.00 «6 кадров» (16+)
05.20 Мультфильмы (0+)

### ТНТ

07.00 «Однажды в России. Спецдайджест» (16+)
08.30 «Хочу перемен» (16+)
09.00 Т/с «Ольга» (16+)
21.00 Х/ф «Друг на час» (16+)
22.00 «Женский Стендап. Дайджесты-2022» (16+)
23.00 «Женский Стендап» (18+)
00.00 «Концерты» (16+)

### БСТ

07.00 «Салям»
10.00 «Алтын тирма». Телевикторина (0+)
10.45 Надо знать. Шагали Шакман бей (12+)
11.00 Автограф. Расуль Карабулатов (12+)
11.30 Новости (на рус.яз.)
11.45 Интервью (12+)
12.00 Историческая среда (12+)
12.30 Новости (на рус.яз.)
12.45 Счастливый час
13.30 Новости (на баш.яз.)
13.45 Бахетнама
14.30 Новости (на баш.яз.)
14.45 Интервью (12+)
15.00 Сулпылар (0+)
15.30 Гора новостей (6+)
15.45 Этно-краса (6+)
16.00 Патриот РФ (12+)
16.15 Специальный репортаж (12+)
16.30 Новости (на рус.яз.)
16.45 Интервью (12+)
17.00 Моя планета Башкортостан (12+)
17.30 Новости (на рус.яз.)
17.45 Криминальный спектр (16+)
18.00 Башкорттар (6+)
18.30 Новости (на баш.яз.)
19.00 Вечерний телецентр
20.00 Сэнгелдэк (0+)
20.15 Полезные новости (12+)
20.30 Вечерний телецентр
21.30 Новости (на рус.яз.)
22.00 Республика LIVE #дома (12+)
22.30 Новости (на баш.яз.)
23.00 Колесо времени (12+)
00.00 Бахетнама (12+)

## Пятница 28

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 «Доброе утро» (0+)
09.00, 12.00, 15.00, 18.00 Новости
09.20 «АнтиФейк» (16+)
09.55 «Жить здорово!» (16+)
10.45, 12.15, 15.15, 16.50 «Информационный канал» (16+)
16.00 «Мужское / Женское» (16+)
18.40 «Человек и закон» (16+)
19.45 «Поле чудес» (16+)
21.00 Время
21.45 «Голос» весны в обновленном составе (12+)
23.55 «Вызов. Первые в космосе» (12+)
00.55 Подкаст.Лаб «20 лет спустя» (16+)
01.40 Подкаст.Лаб «Мелодии моей жизни» (16+)
02.25 Подкаст.Лаб «Неформат» (16+)
03.05 Подкаст.Лаб «АстроУмные» (16+)

### РОССИЯ

05.00, 09.30 «Утро России»
09.00, 14.30, 21.05 Вести. Местное время
09.55 «О самом главном». Ток-шоу (12+)
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести
11.30, 17.30 «60 Минут» Ток-шоу (12+)
14.55 «Кто против?» Ток-шоу (12+)
16.30 «Прямой эфир» (16+)
21.20 Т/с «Дорога к счастью» (12+)
23.25 Х/ф «Я подарю тебе рассвет» (12+)
03.25 Х/ф «Свой-Чужой» (16+)

### УТВ

06.00 Тележурнал 12+
07.00 Мультимир 0+
07.30 Время новостей
08.00 Магия вкуса. Астраханские деликатесы 12+
08.30 Время новостей
09.00 Т/с «День расплаты» (2с) 12+
09.55 И в шутку, и всерьёз 12+
10.00 Песня в подарок 12+
11.00 Портреты. Олег Борисов 12+
12.00 Т/с «Простая жизнь» (14с) 12+
13.00 Дело № (41с) 12+
13.30 Время новостей
14.00 Т/с «Наследники» (43с) 12+
15.00 Т/с «Наследники» (44с)
16.00 Д/ф «Романовы. Судьба русского Крыма» (2с) 12+
17.00 Тележурнал 12+
19.00 Песня в подарок 12+
20.00 Программа «Формула здоровья» (от 07.04.23) 12+
20.20 Детская программа «Дневник улитки» (от 26.04.23)
20.30 Время новостей
21.00 Т/с «Восток-Запад» (15с) 12+
22.00 Магия вкуса. Астраханские деликатесы 12+
22.30 Время новостей
23.00 Т/с «В бегах» (3с) 12+
00.00 Т/с «В бегах» (4с) 12+

### РЕН ТВ

04.50 Т/с «Пляж» (16+)
06.30 «Утро. Самое лучшее» (16+)
08.00, 10.00, 13.00, 16.00, 19.00 Сегодня
08.25, 10.35 Т/с «Морские дьяволы. Смерч» (16+)
13.30 «Чрезвычайное происшествие» (16+)
14.00 «Место встречи» (16+)
16.45 «ДНК» (16+)
17.55 «Жди меня» (12+)
20.00 Т/с «Невский. Расплата за справедливость» (16+)
22.15 Х/ф «Бык» (16+)
00.20 «Своя правда» (16+)
02.15 «Захар Прилепин. Уроки русского» (12+)

### НТВ

05.00, 18.00 «Самые шокирующие гипотезы» (16+)
06.00 «С бодрым утром!» (16+)
08.30, 12.30, 16.30, 19.30 Новости (16+)
09.00 Документальный проект (16+)
11.00 «Как устроен мир» (16+)
12.00, 16.00, 19.00 «Информационная программа 112» (16+)
13.00 «Загадки человечества» (16+)
14.00 «Невероятно интересные истории» (16+)
15.00 Д/п «Засекреченные списки» (16+)
17.00 «Тайны Чапман» (16+)
20.00 Х/ф «Жажда золота» (16+)
21.50 Х/ф «Сила стихии» (16+)
23.40 Х/ф «Мальчики-налетчики» (16+)

### СТС

06.00, 05.50 «Ералаш» (0+)
07.00 М/с «Лунтик» (0+)
08.00 Т/с «Против всех» (16+)
09.00 Х/ф «Двадцать одно» (16+)
11.35 «Уральские пельмени. Смехbook» (16+)
11.55, 19.30, 21.00 Шоу «Уральских пельменей» (16+)
22.30 «Битва каверов» (16+)
00.30 «Импровизаторы» (16+)
01.30 Т/с «Улётный экипаж»

### ТНТ

07.00, 06.20 «Однажды в России. Спецдайджест» (16+)
09.00 Т/с «СашаТаня» (16+)
17.00 Т/с «Однажды в России» (16+)
21.00 «Комеди Клаб» (16+)
22.00 «Галустян плюс» (16+)
23.00 «Stand up» (18+)
00.00 Х/ф «Реальные Пацаны против Зомби» (16+)

### БСТ

07.00 «Салям»
10.00 Атлас Баженова. Башкортостан (12+)
10.30 «Йома» (0+)
11.00 Моя планета Башкортостан (12+)
11.30 Новости (на рус.яз.)
11.45 Интервью (12+)
12.00 Слово Земли. 2.0. Короткометражные фильмы (12+)
12.30 Новости (на рус.яз.)
12.45 Уткэн гумер (12+)
13.15 Курай даны (12+)
13.30 Новости (на баш.яз.)
13.45 Аплодисменты. Гульчачак Шарипова (12+)
14.30 Новости (на баш.яз.)
14.45 Интервью (12+)
15.00 «АйТекэ!» (6+)
15.15 «КультУра». Медиасеть школьных студий (6+)
15.30 Гора новостей (6+)
15.45 Патриот РФ (12+)
16.00 «Аль-Фатиха». (12+)
16.30 Новости (на рус.яз.)
16.45 Интервью (12+)
17.00 Республика LIVE #дома
17.30 Новости (на рус.яз.)
17.45 «Курай даны» (12+)
18.00 «Йома» (0+)
18.30 Новости (на баш.яз.)
19.00 Честно говоря (12+)
19.45 История одного села с.Утекаево Саратовская область (12+)
20.00 Сэнгелдэк (0+)
20.15 Полезные новости (12+)
20.30 «Башкорт йыры-2023» (12+)
21.15 Специальный репортаж (12+)
21.30 Новости (на рус.яз.)
22.00 Спортивная история (12+)
22.30 Новости (на баш.яз.)
23.00 «Байык-2023». I тур (12+)
00.00 Т. Миннуллин «Любовница». Спектакль Сибайского государственного башкирского драматического театра им. А.Мубарякова (12+)



**ӘХМӘТЙӘНОВ Рәшит Минғәли улы**

Оло үкенес менән хәбәр итәбеҙ, 2023 йылдың 3 апрелендә 94-се йәшендә Учалы районының Почетлы гражданы, ауыл хужалығының атҡаҙанған хеҙмәткәре Әхмәтйәнов Рәшит Минғәли улы вафат булды.

Рәшит Минғәли улы 1930 йылдың 1 ғинуарында Иманғол ауыл Советына ҡараған Урал ауылында донъяға килә. 1962 йылда Силәбе ҡалаһында агроном-агитатор һөнәре буйынса совет-партия мәктәбен тамамлай. Хеҙмәт юлын 1940-сы йылдарҙа башлай, учетчик, «Урал» колхозы бригадиры, хисапсы, ялан һәм комплекслы бригадалар бригадиры, рәйес урынбаҫары, «Коммунар» колхозы рәйесе, Белорет районының Калинин исемендәге колхоз рәйесе, Учалы ит комбинаты директоры вазифаларын башҡара.

Ул «Коммунар» колхозы рәйесе булған осорҙа хужалыҡта тулайым продукция ике тапҡырға арта, производство биналары төҙөлә - автогараж, МТМ, эре мөгөҙлө мал һимертеү өсөн 3 мең башҡа иҫәпләнгән комплекс, социаль объекттар - ауыл мәҙәниәт йорто, ФАП, балалар баҡсаһы, ике башланғыс мәктәп, интернат үҙ ишектәрен аса. Иманғол ауыл Советы, район Советы депутаты, КПСС-тың Белорет һәм Учалы комитеттарының ағзаһы була.

Күп йыллыҡ оҙайлы хеҙмәте, юғары оҫталығы өсөн Рәшит Әхмәтйәнов «Ауыл хужалығының атҡаҙанған хеҙмәткәре» исеменә лайыҡ. Халыҡтар дуҫлығы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары, «1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн», «Ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштергән өсөн» миҙалдары, БАССР-ҙың Юғары Советы Президиумының Хөрмәт грамоталары менән наградланған. 2008 йылдың 11 декабрендә уға «Учалы районының Почетлы гражданы» тигән маҡтаулы исем бирелә.

Рәшит Минғәли улының яҡындарының һәм туғандарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ. Уның хаҡындағы яҡшы иҫтәлектәр учалылар күңелендә мәңге һаҡланыр.

**Р.Ғ. Ғиләзетдинов, Р.А. Ғайсин, А.С. Йыһаншин, З.Ғ. Ғарипов, Ф.Ф. Дәүләтгәрәев, Д.У. Каримов, Ғ.С. Мөхәмәтов, Х.Ф. Хәсәнов, В.Ш. Ғәйфуллин.**

**В ООО «Агрофирма Байрамгул» требуются:**
- ТРАКТОРИСТЫ кат. C, D, F.
- ВОДИТЕЛИ кат. B, C, E.
З/плата от 50 000 руб. (Выплата 2 раза в месяц+премия).
Полный соцпакет, спецодежда.
Бесплатное проживание и питание.
**Тел. 8(34791)2-19-42(802); 8 960 383 86 81.**

**Был реклама блогының майҙаны - 6 кв.см. Хаҡы - 228 һум.**

## Суббота 29

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 «Доброе утро. Суббота» (0+)
09.00 «Умницы и умники» (12+)
09.45 «Слово пастыря» (0+)
10.00, 12.00, 18.00 Новости
10.15 «Поехали!» (12+)
11.10 «ПроУют» (0+)
12.15 «Видели видео?» (0+)
14.00 Д/с «Рюриковичи» (16+)
18.20 «Кто хочет стать миллионером?» (12+)
19.20 «Сегодня вечером» (16+)
21.00 Время
21.35 «Клуб Веселых и Находчивых». Высшая лига (16+)
23.50 Х/ф «Эйфель» (16+)

### РОССИЯ

05.00 «Утро России. Суббота»
08.00 Вести. Местное время
08.20 Местное время. Суббота
08.35 «По секрету всему свету»
09.00 «Формула еды» (12+)
09.25 «Пятеро на одного»
10.10 «Сто к одному»
11.00, 17.00, 20.00 Вести
12.00 «Доктор Мясников» (12+)
13.05 Х/ф «Токсичная любовь» (12+)
18.00 «Привет, Андрей!» (12+)
21.00 Х/ф «Очень плохая невеста» (12+)
00.40 Х/ф «Добежать до себя»

### УТВ

06.00 Тележурнал 12+
07.00 Мультимир 0+
07.30 Время новостей
08.00 Один день в городе. Смоленск 12+
08.30 Время новостей
09.00 Т/с «День расплаты» (3с) 12+
09.55 Познавательные истории
10.00 Песня в подарок 12+
11.00 Портреты. Евгений Матвеев 12+
12.00 Т/с «Простая жизнь» (15с)
13.00 Дело № (42с) 12+
13.30 Время новостей
14.00 Т/с «Наследники» (45с) 12+
15.00 Т/с «Наследники» (46с) 12+
16.00 Д/ф «Романовы. Судьба русского Крыма» (3с) 12+
17.00 Тележурнал 12+
19.00 Песня в подарок 12+
20.00 Концерт «Салют, апрель!» 12+
21.00 Т/с «Восток-Запад» (16с)
22.15 Ахмет Лутфуллин. Народный художник Башкортостана. (на рус. языке) 12+
23.00 Х/ф «Невероятные приключения факира» 12+
00.40 Фильм «Соседи. В гости к казахам» 2020 (ф21) 12+

### НТВ

05.15 «Военно-исторические маршруты» (16+)
05.30 Т/с «Пляж» (16+)
07.20 «Смотр» (0+)
08.00, 10.00, 16.00 Сегодня
08.20 «Поедем, поедим!» (16+)
09.20 «Едим дома» (0+)
10.20 «Главная дорога» (16+)
11.00 «Живая еда» (12+)
12.00 «Квартирный вопрос» (0+)
13.00 «Страна талантов» (12+)
15.20 «Игры разумов» (0+)
16.20 «ЧП. Расследование» (16+)
17.00 «Следствие вели...» (16+)
19.00 «Центральное телевидение» (16+)
20.20 «Ты не поверишь!» (16+)
21.25 «Секрет на миллион» (16+)
23.35 «Международная пилорама» (18+)

### РЕН ТВ

05.00, 04.00 «Самые шокирующие гипотезы» (16+)
07.00 «С бодрым утром!» (16+)
08.30, 12.30, 16.30 Новости (16+)
09.00 «Минтранс» (16+)
10.00 «Самая полезная программа» (16+)
11.00, 13.00 «Военная тайна» (16+)
14.30 «Совбез» (16+)
15.30 Документальный спецпроект (16+)
17.00 Д/п «Засекреченные списки» (16+)
18.00 Х/ф «Лысый нянька. Спецзадание» (0+)
19.50 Х/ф «Черная вдова» (16+)
22.30 Х/ф «Титан» (18+)
00.20 Х/ф «Крио» (16+)
02.30 Х/ф «Святым тут не место» (18+)

### СТС

06.00, 05.50 «Ералаш» (0+)
07.00 М/с «Три кота» (0+)
07.30 М/с «Отель «У овечек» (0+)
08.00 М/с «Лекс и Плу. Космические таксисты» (6+)
08.25, 10.00 Шоу «Уральских пельменей» (16+)
09.00, 09.30 «ПроСТО кухня» (12+)
10.40 «Фактор страха. Испытание тайгой» (16+)
11.40 Х/ф «Смокинг» (12+)
13.40 Х/ф «Шпион по соседству»
15.35 Х/ф «Первый мститель» (12+)
18.00 Х/ф «Первый мститель. Противостояние» (16+)
21.00 Х/ф «Охотник на монстров» (16+)
23.00 Х/ф «Новые мутанты» (16+)
00.45 Х/ф «Оленьи рога» (18+)

### ТНТ

07.00, 06.35 «Однажды в России. Спецдайджест» (16+)
09.00 «Бьюти баттл» (16+)
09.30 «Модные игры» (16+)
10.00 «Новые Звезды в Африке» (16+)
11.30 «Экстрасенсы. Битва сильнейших. Дайджест» (16+)
12.20 «Битва экстрасенсов» (16+)
16.55 «Экстрасенсы. Битва сильнейших» (16+)
21.00 «Музыкальная интуиция» (16+)
23.00 «Женский Стендап» (18+)
00.00 Х/ф «Любовницы» (18+)

### БСТ

07.00 «Доброе утро!» (12+)
07.30 Новости (на баш.яз.)
07.45 «Ете егет». Реалити-шоу (12+)
08.30 Это моя профессия (12+)
09.00 Мультфильмы (0+)
09.30 Новости (на рус.яз.)
10.00 Елкэн (6+)
10.30 «Гора новостей». (6+)
10.45 Этно-краса (6+)
11.00 МузКэрэз (0+)
11.30 «Байтус» (6+)
11.45 «Семэр». Телеконкурс для юных художников (0+)
12.00 Тамле. Мы вместе! (12+)
12.30 Новости (на баш.яз.) (12+)
13.00 Уткэн гумер (12+)
13.30 Башкорттар (6+)
14.00 Дарю песню (12+)
16.00 Колесо времени (12+)
17.00 ПРЕМЬРА НА БСТ! М. Файзи «Ак калфак». Спектакль Стерлитамакского государственного башкирского драматического театра им. И. Юмагулова (12+)
18.30 Новости (на баш.яз.)
19.00 Вестник «Газпромтрансгаз Уфа» (12+)
19.15 Вопрос+Ответ=Портрет. Светлана Чураева (6+)
20.00 Сэнгелдэк (0+)
20.15 Полезные новости (12+)
20.30 «Байык-2023». I тур (12+)
21.30 Новости (на рус.яз.)
22.00 Республика LIVE #дома (12+)
22.30 Новости недели
23.15 Концерт заслуженной артистки РБ Лилии Биктимировой

## Воскресенье 30

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00, 12.00, 18.00 Новости
06.10 Подкаст.Лаб «Космические истории» (16+)
06.55 «Играй, гармонь любимая!» (12+)
07.40 «Часовой» (12+)
08.10 «Здоровье» (16+)
09.20 «Мечталлион» (12+)
09.40 «Непутевые заметки» (12+)
10.15 «Жизнь других» (12+)
11.10 «Повара на колесах» (12+)
12.15 «Видели видео?» (0+)
14.00 Д/с «Рюриковичи» (16+)
19.00 «Две звезды. Отцы и дети» (12+)
21.00 Время
22.35 Международный конкурс песни на русском языке «Автора!» (12+)
00.30 «На футболе с Денисом Казанским» (18+)
01.00 Подкаст.Лаб «Антропология» (16+)
01.45 Подкаст.Лаб «20 лет спустя» (16+)

### РОССИЯ

06.15, 03.10 Х/ф «Личные счёты» (16+)
08.00 Местное время. Воскресенье
08.35 «Когда все дома»
09.25 «Утренняя почта»
10.10 «Сто к одному»
11.00, 17.00 Вести
12.00 Большие перемены
13.05 «Петросян-шоу» (16+)
15.00 Х/ф «Бриллиантовая рука» (0+)
18.00 «Песни от всей души» (12+)
20.00 Вести недели
22.00 «Москва. Кремль. Путин.»
22.40 «Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым» (12+)
01.30 Х/ф «Любовь для бедных»

### УТВ

06.00 Тележурнал 12+
07.00 Мультимир 0+
08.00 Магия вкуса. Ямал. Супер-еда для супер людей 12+
08.30 Библейский сюжет (ф9) 12+
09.00 Т/с «День расплаты» (4с) 12+
09.55 И в шутку, и всерьёз 12+
10.00 Песня в подарок 12+
11.00 Портреты. Игорь Кваша 12+
12.00 Т/с «Простая жизнь» (16с)
13.00 Дело №и(43с) 12+
13.30 Д/с «История русского быта (баня) (ф1) 12+
14.00 Т/с «Наследники» (47с) 12+
15.00 Т/с «Наследники» (48с) 12+
16.00 Д/ф «Воина и мир Михаила Калашникова» 12+
17.00 Тележурнал 12+
19.00 Песня в подарок 12+
19.45 Непоседы 0+
20.00 Фильм «Притяжение Байкала» 16+
20.30 Обзор событий недели
21.15 Т/с «Восток-Запад» (17с) 12+
22.10 Фильм «Обыкновенный подвиг Москвы» 2020 (ф38) 12+
23.00 Х/ф «Тариф «Счастливая семья» 12+
00.40 Водопад Гадельша 0+

### НТВ

04.55 Т/с «Пляж» (16+)
06.35 «Центральное телевидение» (16+)
08.00, 10.00, 16.00 Сегодня
08.20 «У нас выигрывают!» (12+)
10.20 «Первая передача» (16+)
11.00 «Чудо техники» (12+)
11.55 «Дачный ответ» (0+)
13.00 «НашПотребНадзор» (16+)
14.05 «Однажды...» (16+)
15.00 «Своя игра» (0+)
16.20 «Человек в праве» (16+)
17.00 «Следствие вели...» (16+)
19.00 Итоги недели
20.20 Шоу «Маска» (12+)
00.00 «Основано на реальных событиях» (16+)
02.10 Т/с «Линия огня» (16+)

### РЕН ТВ

05.00, 23.55 «Самые шокирующие гипотезы» (16+)
07.00 «С бодрым утром!» (16+)
08.30, 12.30 Новости (16+)
09.00 «Самая народная программа» (16+)
09.30 «Знаете ли вы, что?» (16+)
10.30 «Наука и техника» (16+)
11.30 «Неизвестная история» (16+)
12.45 Т/с «Сержант 2» (16+)
20.40 Х/ф «Прогулка среди могил» (18+)
23.00 «Итоговая программа»

### СТС

06.00, 05.50 «Ералаш» (0+)
07.00 М/с «Три кота» (0+)
07.30 М/с «Царевны» (0+)
07.55, 10.00 Шоу «Уральских пельменей» (16+)
09.00 «Рогов в деле» (16+)
11.35 Х/ф «Хроники Спайдервика» (12+)
13.25 Х/ф «Телепорт» (16+)
15.15 Х/ф «Охотник на монстров» (16+)
17.15 М/ф «Angry Birds в кино» (6+)
19.05 М/ф «Angry Birds 2 в кино» (6+)
21.00 Х/ф «Соник в кино» (6+)
23.00 Х/ф «Робот по имени Чаппи» (18+)
01.20 Т/с «Улётный экипаж»

### ТНТ

07.00, 06.35 «Однажды в России. Спецдайджест» (16+)
09.00 «Битва пикников» (16+)
09.30 Т/с «СашаТаня» (16+)
14.00 Т/с «Звездный суд» (16+)
18.00 «Галустян плюс» (16+)
19.00 «Новые Звезды в Африке» (16+)
21.00 «Шоу Воли» (16+)
22.00 «Концерты» (16+)
23.00 Т/с «Однажды в России» (16+)
00.00 «Я тебе не верю» (16+)

### БСТ

07.00 «Доброе утро!» (12+)
07.30 Новости (на баш.яз.)
07.45 «Йома». (12+)
08.15 Тормош. Дер. Москово, Дюртюлинский район (12+)
08.45 «Курай даны». (12+)
09.00 «Бай». (12+)
09.30 Новости (на рус.яз.)
10.00 «Книга сказок». Сказка для малышей (0+)
10.15 «Городок АЮЯ». (0+)
10.30 «Гора новостей». (6+)
10.45 «Сулпылар». (0+)
11.15 Нурбостан сэйэхэте (6+)
11.30 «Кош юлы. Балалар» (6+)
11.45 Вопрос+Ответ=Портрет. Диляра Идрисова (6+)
12.30 Новости недели
13.15 «Алтын тирма» (0+)
14.00 Дарю песню (12+)
15.30 «Дорога к храму». Православная религиозная программа (0+)
16.00 Историческая среда (12+)
16.30 «Честно говоря». (12+)
17.15 Эллэсе... (6+)
18.00 «Укытыусыма». (0+)
20.00 Атлас Баженова. Башкортостан (12+)
20.30 Спортивная история (12+)
21.00 Специальный репортаж (12+)
21.15 Дознание (16+)
21.30 Новости недели
22.15 Республика LIVE #дома (12+)
22.45 Бенефис народной артистки РБ Альфии Каримовой (12+)
01.30 М. Карим «Страна Айгуль».

Актуаль

# Ҡош-ҡорт махсус цехта һуйыласаҡ

***Учалы ҡала-районының ветеринария станцияһында хәбәр итеүҙәренсә, районыбыҙҙа бөгөн эпизоотик хәл тотороҡло, шуға ҡарамаҫтан, ауырыуҙарҙан һаҡланыу саралары тураһында ла оноторға ярамай. Илдә был тәңгәлдә хәл киҫкен булып ҡала, яңынан-яңы ҡурҡыныс ауырыуҙар теркәлә.***

Ветеринария белгестәре һәр малды идентификациялау, йәғни уларҙың асыҡ иҫәбен алыу һәм теркәү мөһимлеген белдерә. Был һәр ауыл-ҡаланың эпизоотик именлеге өсөн кәрәк. Әгәр ҙә, мәҫәлән, көтөүҙә идентификацияланмаған мал осрай икән, кисекмәҫтән тейешле сара күрелергә тейеш. Районыбыҙҙа малдарҙы идентификациялау 98 процент тәшкил итә. Ауылда мал көтөү ойошторолмаһа ла хәүеф ҙур, сөнки бер көтөүҙең икенсеһе менән контактҡа инеүе һәм ауырыу таратыуы ихтимал. Шуға ла уяулыҡты һәм аңлылыҡты көсәйтергә кәрәк, шунһыҙ ҡош-ҡортто, суҫка, һыйыр һәм ваҡ малды аҫрау һәм һаҡлау бик ауырға төшәсәк.

Ауылдарҙа әлеге ваҡытта себеш алыу миҙгеле башланды. Халыҡҡа уларҙы күп осраҡта килтереп һаталар. Хәтерегеҙҙә булһа, 2021 йылда республикала беренсе тапҡыр ҡош киҙеүе теркәлгәйне. Ауырыу Туймазы районында йорт һәм ҡырағай ҡоштарҙа һәм Благовар районындағы ҡошсолоҡ фабрикаһында асыҡланды. Инфекция күгәрсен һәм турғайҙарҙан таралған, тип билдәләнде. Ауырыуҙың төп сәбәбе - ҡош аҫраусылар тарафынан ветеринар ҡағыҙәләрҙең үтәлмәүе. Ошондай күңелһеҙ хәлгә тарымаҫ өсөн, себеш-бәпкәләрҙе кемдән һатып алыу мәсьәләһенә бик етди ҡарарға кәрәк, юғиһә вайымһыҙлыҡ киҫкен проблемаларға килтереүе ихтимал. Белгестәр ауыл халҡына ҡош-ҡорт һатып алғанда себеш һатыусыларҙан ветеринария белешмәһен һорарға кәңәш итә. Әгәр был документ юҡ икән, шикләнергә урын бар тигән һүҙ. Ҡош-ҡорт һатыусыларҙың машина номерын телефонығыҙға төшөрөп алырға ла мөмкин.

Алған себештәрегеҙ үлә башлаһа, ветеринарға мөрәжәғәт итергә онотмағыҙ, ти белгестәр. Уның ниндәй ауырыуҙан үлгәнен асыҡларға кәрәк, юғиһә ҡурҡыныс сир таралыуы ла мөмкин. Ҡош киҙеүе йәшен тиҙлегендә таралыуын онотorға ярамай.

Бөгөн Рәсәйгә Германия, Чили һәм Аргентинанан тере ҡош-ҡорт, йомортҡа, ҡош ите һәм әҙер ит продукцияһын килтереү тыйылды, тип хәбәр итә Россельхознадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы.

Сикләүҙәр был илдәрҙә ҡош киҙеүе таралыу хәүефе килеп тыуыуға бәйле. Тыйыу шулай уҡ ҡош аҙығына, шулай уҡ ҡоштарҙы тотоу, һуйыу һәм күсереү өсөн ҡулланылған ҡорамалдарға ла ҡағыла. Сикләүҙәр Ольденбург округының туғыҙ предприятиеһына һәм Германияның Фехта һәм Кохем-Целль районДарына, Чилиҙың Моле, Биобио, Валпараис өлкәләренә һәм Аргентинаның Кордоба провинцияһына ҡағыла.

1 марттан Рәсәйҙә ауыл хужалығы тармағында тағы бер үҙгәреш көтөлә, ҡош-ҡорт һуйып һатыусылар өсөн яңы ветеринар ҡағыҙәләр көсөнә инә.

- Хәҙер һатырға сығарыласаҡ ҡош-ҡортто ла, мал кеүек махсус урындарҙа ғына һуйырға рөхсәт ителәсәк. Ҡош итен кафеға тапшырырға теләйһеңме, әллә инде район үҙәгендәге баҙарға ғына сығып торорға йыйынаһыңмы - һис айырмаһы юҡ. Тейешле урынға алып барып, нормаға ярашлы шарттарҙа һуйылған итте генә саҙаға сығарырға рөхсәт ителә. Район кимәлендә проблеманы хәл итеү өсөн Учалы ауылында һәм Ахунда ҡош-ҡорт һуйыу цехтары асыу планлаштырыла. Был ике биләмәлә иң күп ҡош-ҡорт аҫрала, шуға ла һуйыу пунктын асыуҙы тәғәйен ауылдарҙа ойошторорға хәл ителде.

Ҡош итен үҙең өсөн, туғандарыңа күстәнәскә бирер өсөн әҙерләһәң, элеккесә үҙ хужалығыңда һуя алаһың.

Себеш һатып алыусыларҙы тағы бер ҡабат иҫкәртеп китеү урынлы һанайым, себеш-бәпкә һатып йөрөүселәрҙең мотлаҡ ветеринария белешмәләре булыуы мөһим. Ҡушып антибиотик тәҡдим итеүҙәре лә был себештәр ауырыу түгелме икән, тигән һорау тыуҙырырға тейеш. Әгәр ҙә берәүһендә генә ҡош киҙеүе асыҡланһа, ветеринар ҡануниәткә ярашлы, 5 км радиус зонаһындағы бөтә ҡош-ҡорт юҡ ителәсәк, - тип аңлатма бирҙе ветеринария станцияһы начальнигы Радис Таһиров.

Яңы закон буйынса 2027 йылға тиклем үләкһә соҡорҙары ябылырға тейешлеге тураһында ла бәйән ителде. Ошо рәүешле, ауыл хужалығы малдарының мәйеттәрен ерләү өсөн яңы зыяраттар булдырылмаясаҡ. Бөгөнгө көндә район администрацияһы ҡарамағында 26 емтек ерләү соҡоро иҫәпләнә. Үләкһә соҡорҙары замананда дәүләт тарафынан төҙөлә һәм финансалана. Яңы закон буйынса, хәҙер мал аҫрап табыш алыусы үләкһәләрҙе ҡайҙа ерләү мәсьәләһен үҙе хәл итергә тейеш. Шуға бәйле барлыҡ фермерҙарға, эре һәм урта ауыл хужалығы предприятиеларына крематорийҙар алып проблеманы хәл итеү бурысы йөкмәтелә. Ҡала-районыбыҙҙа ошондай яндырғыс мейестәр бөгөн «Марал йорто»нда, «Байрамғол агрофирма»һында һәм Хәлитов шәхси эшҡыуарлығында бар.

**Әлиә ДАУЫТОВА.**

Мәғариф

# Уҡыу йылы тамамлана, имтихандар башлана...

***Уҡыу йылы тамамланырға һанаулы ғына көндәр ҡалды. Сығарылыш класы уҡыусыларын алда етди һынауҙар - имтихандар көтә.***

2023 йылда Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырыу көндәре билдәле булды. Учалы ҡалаһында имтихан уҙғарыуҙың ике пункты әҙерләнә - 1-се Башҡорт лицейында һәм 3-сө лицейҙа. Быйыл ҡала-районыбыҙҙа 282 уҡыусы мәктәпте тамамлай һәм улар тап ошо пункттарҙа имтихан бирәсәк. Төп осор - 26 майҙан 20 июнгә тиклем, өҫтәмә осор - 22 июндән 1 июлгә тиклем. 26 май - география, әҙәбиәт һәм химия; 29 май - рус теле; 1 июнь - профилле һәм база кимәлендә математика; 5 июнь - тарих һәм физика; 8 - йәмғиәтте өйрәнеү. 13 июнь - сит телдәр (яҙма), биология; 16-17 июнь - сит телдәр (телдән). 19 һәм 20 июнь - информатика, ИКТ.

Юғары уҡыу йорттарына инергә йыйынмаған уҡыусылар БДИ урынынан рус теленән һәм база кимәлендәге математиканан дәүләт сығарылыш имтиханы тапшыра.

9-сы класты быйыл 920 уҡыусы тамамлай. Улар ике мотлаҡ фәндән - математиканан, рус теленән һәм ике һайланған фән буйынса дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын тапшырасаҡ.

9-сы һәм 11-се класс уҡыусылары өсөн 19 май һуңғы уҡыу көнө буласаҡ, башҡа кластар иһә мәктәп календары графигына ярашлы уҡыу йылын тамамлаясаҡ. 9-сы кластарға тантаналы рәүештә аттестат тапшырыу 23 июнгә, сығарылыш класы уҡыусыларына - 24 июнгә билдәләнгән.

1 апрелдән 1-се класҡа ғаризалар ҡабул итеү башланды. 1 апрелдән мәктәпкә беркетелгән биләмәлә йәшәгән (йәғни йәшәгән урын буйынса) балаларҙың ата-әсәләре беренсе класҡа ғариза яҙырға мөмкин. Башҡалар 6 июлдән алып мәктәптә буш урындар бөткәнсе ошондай хоҡуҡҡа эйә, ләкин ағымдағы йылдың 5 сентябренән дә һуңға ҡалмаҫҡа кәрәк. Һеҙ теләгән белем усағында урын булһа, баланы уҡырға алырға тейештәр. Урын юҡ икән, мәғариф идаралығы икенсе мәктәпкә урынлашырға ярҙам итәсәк. Ҡала-районыбыҙҙың 26 белем усағында әлеге ваҡытта 1-се класҡа ғаризалар ҡабул итеү бара, уларҙың һаны 40-ҡа етәсәк.

Ғаризаны «Дәүләт хеҙмәттәре» порталы, «Башҡортостан Республикаһы мәктәптәрен электрон комплектлау» мәғлүмәт системаһы аша, заказлы хат менән йәки мәктәпкә килеп тапшырырға була.

Әгәр ташламаларығыҙ бар икән, ғаризаға ташламаны раҫлаған документтарҙы беркетегеҙ. Уларҙың төп нөсхәһен мәктәпкә алып барырға кәрәк - шәхси кабинетҡа тейешле хат ебәрелә.

Кемдәр льготаға эйә? Әлеге мәктәптә бер туған апаһы йәки ағаһы уҡығандарҙы; интернат тибындағы белем усаҡтарына прокуратура, суд, тәфтиш комитеты хеҙмәткәрҙәренең балаларын; интернат булмаған мәғариф учреждениеларында хәрбиҙәрҙең һәм эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәренең (шул иҫәптән полиция хеҙмәткәре булып һаналмағандарҙың да) балаларын аласаҡтар. Мобилизацияланған граждандар контракт буйынса хәрби хеҙмәт үтеүсе статусына эйә, йәғни уларҙың да балаларына тәү сиратта мәктәпкә алыу льготаһы ҡағыла.

«Үҙ» мәктәбендә мәғариф бүлеге аша белешергә мөмкин. Әгәр шылтыратыу мәшәҡәт тойолһа, интернетта «Башҡортостан Республикаһы мәктәптәрен электрон комплектлау» порталына инеп, «Биләмәләрҙе беркетеү тураһында ҡарар» бүлеген ҡарай алаһығыҙ. Бына һылтанма: complect.edu-rb.ru/ordinances. Унда үҙ муниципалитетығыҙҙы табып, документты асып ҡарап, адрес буйынса мәктәбегеҙҙе таба алаһығыҙ.

Теркәү урыны буйынса мәктәпкә барыусылар һәм льготаға эйә булыусылар 30 июнгә тиклем документ тапшыра ала. 3 июлдән дә һуңға ҡалмайынса мәктәп беренсе класҡа ҡабул итеү тураһында бойороҡ сығара.

Ҡағиҙә булараҡ, 1 сентябргә 6,5 йәш тулып өлгөргән һәм һигеҙ йәшкәсә балаларҙы беренсе класҡа уҡырға биреү өсөн документтар һәм ғариза тапшырырға мөмкин. Баланың сәләмәтлек йәһәтенән сикләүҙәре булмауы шарт.

Шул уҡ ваҡытта саҡ ҡына алдараҡ йәки һуңыраҡ та мәктәпкә барырға була, әммә бының өсөн үҙ районыңдың мәғариф идаралығынан рөхсәт алырға тура киләсәк.

Яңы уҡыу йылында ҡалабыҙҙың 9-сы микрорайонында 1225 урынға иҫәпләнгән полилингваль мәктәп ишектәрен асасаҡ. Бөгөн уҡыусыларҙы теркәү башланған да инде. Объект Рәсәй Президенты Владимир Путиндың май указдары тарафынан билдәләнгән «Мәғариф» милли проектын тормошҡа ашырыуға ярашлы төҙөлдө. Яңы мәктәптең майҙаны 18 мең квадрат метр тәшкил итә. Дүрт ҡатлы бинала ике спорт залы, иркен тантаналар залы, ашхана урынлашҡан. Башланғыс кластар өсөн уйын бүлмәләре һәм биләмәләре менән айырым уҡыу блоғы төҙөлдө. Шулай уҡ проектҡа ярашлы мәктәп ихатаһында спорт, уйын майҙансыҡтары, линейкалар һәм башҡа тантаналы саралар үткәреү урыны булдырылды. Хәрәкәт мөмкинлеге сикләнгән балалар өсөн пандустар, лифттар ҡуйылған. Мәктәп заманса йыһазландырылған. Уҡыусыларға белем алыу өсөн барлыҡ уңайлы шарттар ҙа булдырылған.

Мәктәптәргә ҡабул итеүгә бәйле һорауҙар буйынса эш көндәрендә иртәнге 09.00 сәғәттән 17.00 сәғәткә тиклем (13.00-14.00 төшкө ял) 8(34791) 6-14-86 телефонына шылтыратып белешмә алырға мөмкин.

**Әдилә ФӘРРӘХОВА.**

Профйүнәлеш

# «Турникетһыҙ аҙна» - һөнәр менән танышыу ваҡыты

***«10-15 апрелдә «Турникетһыҙ бер аҙна» тип исемләнгән Бөтә Рәсәй акцияһы үтте. Акция сиктәрендә уҡыусылар, студенттар предприятиелар эшмәкәрлеге, етештереү процесы, яңы һөнәрҙәр тураһында мәғлүмәткә эйә була, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарҙы бирә. Башҡортостанда был акция 2017 йылдан үткәрелә.***

Өфө «Эш кейеме комбинаты» ҡарамағындағы «Учалы тегеү фабрикаһы» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте бөгөн Урал арьяғы еңел сәнәғәт тармағында иң эре һәм ҡеүәтле предприятиеларҙан һанала. Предприятиела 600-ҙән ашыу кеше эшләй. Шуға ҡарамаҫтан, эшсе ҡулдар етешмәй. Фабрика етәкселеге йыл һайын йәйге каникул мәлендә аҡса эшләргә теләгән үсмерҙәрҙе эшкә ала. «Турникетһыҙ бер аҙна» акцияһы сиктәрендә 10-сы мәктәптең 8-се класс уҡыусылары Учалы тегеү фабрикаһына экскурсияға килделәр. Уларға предприятие етештергән продукциялар хаҡында бәйән иттеләр. Мәктәп уҡыусылары үҙ сиратында тегенселәр эшләгән ҡорамалдарҙы, эш шарттары менән таныштылар, эш кейемдәрен нисек итеп теккәндәрен ҡаранылар.

- «Турникетһыҙ бер аҙна» Бөтә Рәсәй акцияһы йылына ике тапҡыр - апрель һәм октябрь айҙарында ойошторола. Акцияның маҡсаты - уҡыусыларға заманса производство тураһында мәғлүмәт биреү, уларҙы предприятиелар структураһы, эш шарттары һәм үҙенсәлектәре менән таныштырыу. Иң мөһиме - производство хеҙмәтен күрһәтеү, - ти мәғариф бүлеге методисы Эльвира Ҡоланбаева. - Ҡала-район мәктәптәре акцияға дәррәү ҡушылды. Уҡыусылар өсөн экскурсиялар мәшғүллек үҙәге һәм мәғариф бүлеге тарафынан ойошторолдо. Ҡыҙҙар һәм малайҙар Учалы тау-байыҡтырыу комбинатында, «РИВС» машиналар төҙөү заводында, янғын һүндереү часында, Учалы тегеү фабрикаһында һәм башҡа ойошмаларҙа булды. Йәштәр хеҙмәт шарттары, баҙарҙа талап ителгән һөнәрҙәр тураһында белешмә алды, продукцияның башынан алып аҙағынаса эшләү процессы менән таныштылар.



*10-сы мәктәптең 8-се класс уҡыусылары*

Тегеү фабрикаһында уҡыусылар барлыҡ цехтарҙы ҡарап сыҡҡандан һуң, йәйге каникул ваҡытында эшкә урынлашыу хаҡында ла мәғлүмәт алдылар, күбеһе кадрҙар бүлегенә килеп яҙылып та өлгөрҙөләр. Мәҫәлән, Әмир Хажиев үҙған йылда ла бер ай дауамында эшләп өлгөргән булған. Быйыл да аҡса эшләп алырға уйлайым, ти ул. Әйткәндәй, бер ай эсендә бында 13 мең һумдан алып 26 меңгә тиклем эш хаҡы алырға мөмкинлек бар.

- Экскурсия ҡыҙыҡһыныу уятты. Июнь, июль айҙарында мин дә аҡса эшләп ҡарау теләге менән янып ҡайттым. Беренсенән, үҙем өсөн яңы һөнәр үҙләштерәсәкмен, икенсенән, үҙем эшләп тапҡан аҡса күпкә ҡәҙерлерәк буласаҡ, - ти Эльза Ғәниева.

Предприятие етәкселеге эш шарттарын еңеләйтеү маҡсатында әленән-әле заманса ҡорамалдар һатып ала. Заказдар күп, бөгөн фабрика өс йөҙҙән ашыу төр изделие тегә. Урындағы предприятие-ойошмаларҙың барыһы ла тиерлек йылдар дауамында һыналған, ышаныслы Учалы тегенселәре хеҙмәте менән ҡуллана. Эре заказсылар араһында «Рәсәй тимер юлдары», «Роснефть», «Башнефть», «Газнефть», «Трансгаз» компаниялары, «Росгвардия» хеҙмәте бар.

- Бөгөн фабрикала эшсе ҡулдар етешмәй. Беҙ йәштәрҙе, шул иҫәптән тәжрибәләре булмағандарҙы ла эшкә алабыҙ. Уларҙы остаздар хеҙмәткә өйрәтә. Үҙған йыл каникул ваҡытында, мәҫәлән, 14 йәштән өлкәнерәк 60 уҡыусы эшләне. Быйыл да уҡыусыларҙы көтәбеҙ, - ти Учалы тегеү фабрикаһының баш инженеры Ә. Зәйнәғәбдинова.

**Вилиә ЯНБАЕВА.**

Милли кейем көнөнә

# Халҡыбыҙҙың асылы сағыла

***20 апрель - Милли кейем көнө. Ул 2020 йылдан алып йылына ике тапҡыр билдәләнә һәм халыҡ тарафынан ҙур ҡыҙыҡһыныу, хуплау тапты. Ошо көнгә арналған байрамдарҙа халыҡтың ихлас ҡатнашыуы ла быға дәлил.***

Милли кейем - ул халыҡтың көнкүрешен, йәшәү рәүешен, мәҙәниәтен һәм тарихын ғына түгел, хатта уның күңел донъяһын да сағылдырған ҡомартҡы. Халҡыбыҙҙың рухи хазинаһы булған ошо ҡомартҡыны беҙ ҡәҙерләп һаҡларға, киләсәк быуынға еткерергә бурыслыбыҙ.

Ошо көндәрҙә Сәфәр урта мәктәбенең Мансур филиалында ла Милли кейем көнөнә арналған бик матур сара уҙҙы.

Балаларҙа туған телгә ҡыҙыҡһыныу уятыу, телебеҙҙе үҫтереү, һаҡлау, халҡыбыҙ йолаларына ихтирам тәрбиәләү, уҡыусыларҙың ижади һәләттәрен асыу кеүек изге маҡсаттарға нигеҙләнеп ойошторолдо был сара. Мәктәп уҡыусылары менән бер рәттән, сарала Мансур ауылы ағинәйҙәре, ауыл китапханаһы етәксеһе Вәлимә Ғарипова, йәмәғәт эштәрендә ҡайнап йәшәгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Мансур мәктәбендә 30 йыл эшләгән, хәҙерге ваҡытта хаҡлы ялдағы ветеран уҡытыусы, хеҙмәт ветераны Тәнзилә Сәбиғиәр ҡыҙы Йыһаншина ла ҡатнашты.



*Милли кейемдәрҙә - халыҡ асылы*

Сараны Лена Рәхимйән ҡыҙы Ҡадирова милли кейем тарихы, уның төрҙәре менән таныштырыуҙан башлап ебәрҙе. Венер Йәнбәковтың биографияһы хаҡында китапхана етәксеһе Вәлимә Рәфҡәт ҡыҙы һөйләп киткәс, Тәнзилә Сәбиғиәр ҡыҙы В. Йәнбәковтың «Ҡул тирмәне» исемле әкиәте тураһында бәйән итте. Был әҫәргә ейәне Денис Йыһаншин һүрәт тә эшләп биргән икән, уны уҡытыусы мәктәпкә бүләк итте. Сығышында Тәнзилә апай балаларға ҡул тирмәне хаҡында ла ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр еткерҙе. Уның нимәнән һәм нисек эшләгәнен, халҡыбыҙҙың файҙалы аҙығы талҡан тураһында ла ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр еткерҙе. Хатта үҙе эшләгән талкан, сыр һәм өлкән килене Дилара бешергән пироггарҙан ауыҙ иттерҙе. Кесе килене Эльвира уҡытыусыларға бүләк итеп ебәргән сәскәләр гөлләмәһен дә тапшырҙы. Әлбиттә, халыҡ мәҙәниәтенең бер өлгөһө булған милли кейем тураһында уҡытыусы үҙ фекерен еткерҙе.

Мансур ағинәйҙәренең милли кейемдәрҙә йыр башҡарыуҙары, 9-сы класс уҡыусыһы Эдуард Нәзершиндың аһәңле ҡурай моңо һәм өләсәһе Тәнзилә Сәбиғиәр ҡыҙының йыры сараға айырыуса йәм өҫтәне.

**Һүҙ аҙағында.** Башҡортостанда 160-тан ашыу милләт вәкиле татыулыҡта йәшәй. Уларҙың һәр береһенең үҙенең тарихы, йолалары, милли кейемдәре. Милли кейем көнө - тарихыбыҙға, мәҙәниәтебеҙгә хөрмәт күрһәтеү мөмкинлеген бирә, үҫеп килгән быуынға йолаларыбыҙҙың ҙур байлыҡ булыуын аңлата. Милли костюм - ябай кейем түгел, оҙон тарихи юл һөҙөмтәһе. Ул - халыҡтың тарих үҙенсәлеген сағылдырыусы быуаттар буйы һаҡланып килгән ҡомартҡы.

**Вәлимә ҒАРИПОВА, Мансур ауылы.**

Мәғариф

# Бөтә Рәсәй йәрминкәһе

***14 апрель көнө Учалы ҡалаһында ла «ПРОФФЕСТ. Рәсәйҙә хеҙмәт. Мөмкинлектәр ваҡыты» тип аталған Бөтә Рәсәй эшкә урынлашыу йәрминкәһе үтте. Күңеленә оҡшаған, һәләттәренә тура килгән эшкә урынлашыу өсөн тәү шарт - үҙ ваҡытында тейешле һөнәри белем алыу.***



Учалы тау сәнәғәте колледжы базаһында С. Низаметдинов исемендәге сәнғәт һәм мәҙәниәт колледжы, Белорет медицина колледжы, Өфө дәүләт нефть техник университеты һәм хужалар үҙҙәре уҡыу йорттары тураһында ентекләп һөйләнеләр, уҡырға инеү һәм уҡыу шарттары менән таныштырҙылар, оҫталыҡ кластары үткәрҙеләр. Ҡыҙ-егеттәр үҙҙәрен медицина хеҙмәткәре, ашнаҡсы, электрослесарь вазифаларында һынап та ҡараны. Мәҙәниәт колледжы студенттары, буласаҡ хореографтарға эйәреп, бейеү алымдарын өйрәнеүе лә бик мауыҡтырғыс һәм күңелле үтә.

Район хакимиәте башлығының эшҡыуарлыҡ һәм инвестициялар буйынса урынбаҫары Әсғәт Әсаҙуллин һәм «Көнсығыш район-ара мәшғүллек үҙәге» хеҙмәткәрҙәре «Үҙмәшғүллек. Ҡулланыу инструкцияһы», «Профоткрытка» темаларына тренинг үткәрә.

Башлыса мәктәптәрҙең 10-сы класс уҡыусылары саҡырыла, әммә эшкә урынлашыу йәрминкәһе булғас, әлбиттә, бар дәғүәселәр ҙә эш биреүселәр менән аралаша, вакансиялар һайлай алдылар.

P.S. Тау сәнғәте колледжы таусылар, техник белгестәр менән генә түгел, кулинарҙар менән дә дан ала башланы. Ошо көндәрҙә Өфө сауҙа-иҡтисад колледжында «Бәрәкәтле Пасха» тип аталған республика конкурсы үтте. Колледж студенты Динар Әхмәтдинов 2-се урын алһа, Максим Остапенко - «Иң һөйкөмлө рәүештә» (кондитер изделиеһы тураһында һүҙ бара), Анна Губина - «Иң яҡшы сауҙа күренешендә» номинацияларында дипломдарға лайыҡ булдылар.

**Булат ЯХИН.**

Уҡытыусы һәм остаз йылына

# Хәтерҙәрҙә ҡалыр шәхес

***Ҡәйепҡол ауылында клуб мөдире Гөлнур Вәлиуллина тарафынан Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы, республиканың атҡаҙанған уҡытыусыһы ауылдашыбыҙ, ағинәйебеҙ Шакирова Әнүзә Сабирйән ҡыҙының яҡты иҫтәлегенә арналған «Хәтер кисәһе» үткәрелде.***

Кисәлә уның ғаиләһе, туғандары, класташтары, коллегалары ҡатнашты. Әҙәм балаһының ғүмеркәйҙәре ағып киткән һыу һымаҡ ҡына шул. 28 март уға 70 йәш тулған булыр ине.

Шакирова Әнүзә 1953 йылдың 28 мартында Муса ауылында Сабирйән ағай менән Әнисә апай ғаиләһендә өсөнсө бала булып донъяға килә. Башланғыс белемде тыуған ауылында ала. 1968 йылда Яңы Байрамғол һигеҙ йыллыҡ мәктәбен тамамлағандан һуң, Белорет педагогия училищеһында уҡый.

1972 йылда Әнүзә Сабирйән ҡыҙы йүнәлтмә буйынса Ғафури районына эшкә ебәрелә. Өс йыл Мәндем ҡасабаһында эшләгән дәүерҙә үҙ эшенә яуаплы ҡараған, тырыш, талапсан уҡытыусыны, йәш кенә булһа ла, коллегалары профсоюз етәксеһе итеп тә һайлап ҡуялар.

1975 йылда тыуған яғына ҡайтып, дәртләнеп эшкә тотона. Яңы Байрамғол мәктәбендә тәүҙә география фәнен уҡыта, һуңынан башланғыс кластар уҡытыусыһы булып эшләй. Йор, тура һүҙле, тырыш уҡытыусы коллегалары, ауылдаштары араһында ҙур абруй ҡаҙана. 1989 йылда Әнүзә Сабирйән ҡыҙына мәғариф отличнигы званиеһы бирелә.

90-сы йылдар эҙләнеүҙәр, яңы асыштар йылы булып иҫтә ҡалған. Рәсәйҙең төрлө мөйөштәренән килгән ғалимдарҙың лекцияларын тыңлау, уҡытыусыларҙың оҫталыҡ кластарын ҡарау бик ҡыҙыҡлы ине. Күп кенә уҡытыусылар системалы рәүештә баланың логик фекерләү һәләтен үҫтереүгә нигеҙләнгән Элконин-Давыдов, Занков, «Программа - 2100» программалары буйынса эшләнеләр. Әнүзә Сабирйән ҡыҙы ла ошо яңылыҡтар эсендә ҡайнап йәшәне. Туған тел дәрестәрендә кубиктар, таблицалар ярҙамында ҡыҫҡа ваҡыт эсендә уҡырға, яҙырға өйрәтеү ысулдарын да ҡулланды (авторы Ш.Ш. Әхмәҙиева). Уның тырыш хеҙмәте тураһында матбуғат биттәрендә күп кенә мәҡәләләр донъя күрҙе. 1996 йылдың ноябрь айында уға Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы исеме бирелде.

Сараны башларҙан алда ветеран уҡытыусы, ауылыбыҙҙың ағинәйе Фәтхуллина Фәрхинур Мөхәмәтйәр ҡыҙы аят уҡыны. «Хәтер кисә»һе Әнүзә Сабирйән ҡыҙының тормош юлына арналған видеороликты ҡарау менән башланды. Был видеороликты берәү ҙә тыныс ҡына ҡарай алмағандыр, күҙҙәргә йәштәр төйөлдө.Класташтары, дуҫтары Әнүзә Сабирйән ҡыҙы тураһында иҫтәлектәре, хәтирәләре менән уртаҡлаштылар.

Муса ауылы башланғыс мәктәбендә бергә уҡыған класташы Низамова Гәүһәр Мөждәбә ҡыҙы:

- Беҙ Әнүзә менән бер партала ултырып уҡыныҡ. Ул яҡшы уҡыны. Ныҡ ярҙамсыл булды. Бәләкәй генә булһаҡ та, ғүмерлеккә дуҫ булырға һүҙ ҡуйышҡайныҡ. Дуҫлығыбыҙ ныҡлы булды. Белмәйем, беҙҙеке һымаҡ ныҡлы дуҫлыҡ башҡа бер кемдә лә булмағандыр ул, - тине.

Нәсимә Абдразаҡова:

- Әнүзә менән Яңы Байрамғол һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә бергә уҡыныҡ. Ул шул тиклем һәйбәт уҡыны. Бөтәһен дә әйтеп ҡалайым тигәндәй, пулеметтан атҡан кеүек шәп итеп һөйләр ине, мәктәптә үткәрелгән сараларҙың һәр саҡ уртаһында ҡайнаны.

Нәсимә Абдразаҡова Әнүзә Сабирйән ҡыҙының ярытып йырлаған «Таң ата» халыҡ йырын башҡарҙы.

Ветеран уҡытыусы Мифтахова Рәйфә Әхмәҙиә ҡыҙы:



*Шакирова Әнүзә Сабирйән ҡыҙы*

- Белорет педучилищеһынды уҡыу, Байрамғол мәктәбендә бергә эшләү, төрлө сараларҙа бергә ҡатнашып йөрөүҙәр беҙҙе яҡынайтты ғына. Ғаиләле булып киткәс тә, беҙ айырылманыҡ, ғаиләләр менән бергә йөрөштөк, һөҙөмтәлә яҡын әхирәттәр булып киттек. Уңыштарыбыҙ менән ҡыуаныштыҡ, рухи яҡтан бер-беребеҙгә терәк булдыҡ. Әхирәтем кәрәк саҡта иң беренсе ярҙамға килер ине. Бик ихлас булды донъя көтөүгә, иҫ китмәле егәрле хужабикә ине. Ҡапҡа эсе күҙҙең яуын алып торған матур-матур сәскәләргә күмелеп ултырҙы.

Беҙгә бит һин үҙең етмәй,<br>
Эх, бик тә кәрәк инең.<br>
Бергә йәшәгән осорҙа<br>
Һин беҙгә терәк инең.<br>
Етмәй ихлас фекерҙәрең,<br>
Етмәй аҡыллы һүҙең.<br>
Ниндәй эштәр ҡылыр инең,<br>
Иҫәнлектә булһаң үҙең, -

тип, шиғыр юлдары менән тамамланы сығышын.

Уральскиҙан килгән Һибәтуллин Камилдың һөйләгән тормошсан, фәһемле шиғырҙары халыҡтың күңеленә хуш килде.

Мәҫкәү ауылының башланғыс кластар уҡытыусыһы Мәүлитова Зилдә Әхмәҙиә ҡыҙы:

- Әнүзә Сабирйән ҡыҙы башланғыс класс уҡытыусыларының методик берекмә етәксеһе булараҡ, уҡыу-уҡытыу эшендә ниндәй генә яңылыҡтар керетелмәһен, беҙҙе һә тигәнсе, йыйып алып, таныштырып барыр ине.

Үҙе һәр саҡ үрнәк дәрестәр күрһәтте, йәш уҡытыусыларҙы күп нәмәгә өйрәтте. Беҙгә асыҡ дәрескә килһә, береһен дә үпкәләтмәй генә, тураһын әйтеп, үҙенсә ярытып, анализ яһап ҡуйыр булды. Алсаҡ йөҙлө, йор һүҙле апайыбыҙ моңло йырҙары менән күңелдәребеҙҙе арбаны, бейеп тә китер ине. Асыҡ дәрестәрҙән һуң уҡытыусылар араһында төрлө уйындар, йыр-бейеүҙәр, ярыштар ойошторолдо. «Мөғжизәләр яланы», «Нимә? Ҡайҙа? Ҡасан?» уйындарын үҙ иттек. Һәр уҡытыусы үҙенең белемен тикшереп, еңеп, бүләк алып, бай тәжрибә туплап ҡайтыр ине.

Беҙ Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Әнүзә Сабирйән ҡыҙына ҙур рәхмәтлебеҙ, шундай ҙур шәхес менән эшләгәнебеҙгә ғорурланабыҙ. Ул беҙҙе алға әйҙәне, үҙе нисек ғаиләһе менән матур йәшәһә, нисек дәртле булһа, нисек эшен ярытып башҡарһа, нисек бала йәнле булһа - барыһына ла өйрәтте, бай ҡомартҡы ҡалдырҙы, - тип һөйләне.

- Ул мәктәптә генә түгел, барлыҡ йәмғиәт эштәрендә, мәҙәниәт усағында ла ҡайнап йәшәне. Көр тауышы менән дәрт өҫтәп, таҡмаҡтары менән бейетеп,тура һүҙе менән уйландырып ҡуя торған кеше ине. Хаҡлы ялда булыуға ҡарамаҫтан, барлыҡ саралар, байрамдар унһыҙ үтмәне. Беҙ уны юҡһынабыҙ, һағынабыҙ. Ятҡан урыны йомшаҡ, йәне йәннәттә булһын, тыныс йоҡлаһын, - тине Гөлнур Рәшит ҡыҙы.

Халҡының хәтерендә ҡалырлыҡ итеп башҡарған фиҙакәр хеҙмәте, тирә-йүнендәге кешеләргә ҡарата йылы, матур мөнәсәбәте әҙәм ғүмерен оҙонайтып, үлемһеҙ итәлер. Әнүзә Сабирйән ҡыҙы әсәһенең серҙәше лә, ныҡлы таянысы ла булды. Әсәһе, Әнисә апай, янына көнөнә әллә нисә килеп эштәрен эшләп китер ине. Тормош иптәше Лирман Усман улы Фатхуллин менән кешеләргә өлгө булырлыҡ матур тормош ҡорҙолар, өс баланы бынамын тигән иттереп тәрбиәләп үҫтереп, тормош юлына аяҡ баҫтырҙылар, хәстәрлекле олатай, өләсәй булдылар. Әнүзә Сабирйән ҡыҙы үҙ ғүмерендә әллә күпме юғалтыуҙар, ҡайғылар кисерһә лә, башын түбән эйеп, илап-һыҡтап йөрөмәне, рухи яҡтан көслө кеше булды. «Терeләрҙең ҡәҙерен бел, үлеләрҙең ҡәберен бел», тигән халҡым. Һәр кеше ғүмере үҙенә генә хас бер ҡабатланмаҫ сихри моңдан торалыр ул. Был «Хәтер кисәһе» үтә лә һағышлы, үтә лә моңһоу булды. Ауылыбыҙҙа бер моң өҙөлдө...

Кисәнең һуңында клуб мөдире Гөлнур Рәшит ҡыҙы Вәлиуллина, халыҡты саҡырып, Ифтар үткәрҙе. Әнүзә Сабирйән ҡыҙы һәм әрүахтар рухына бағышлап аят уҡылды. Уҡылған аяттар әруахтарыбыҙға барып етеп, рухтарын шат ҡылһын ине. Илдәребеҙ тыныс, күгебеҙ аяҙ булһын!

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА,**
**Ҡәйепҡол ауылы.**

podpiska.pochta.ru

Яҡташтарыбыҙ

# Тормоштан йәм табалар

***Орловка ауылында бәхетле пар ғүмер итә - Сания һәм Рәис Шәмиғоловтар. Бер-береһенә терәк булып, тормош һынауҙарын уртаҡ итеп, тиңтигеҙ ғүмер кисерә улар.***

Рәис Сәлмән улы 1941 йылда Ялсығол ауылында донъяға килгән. Иҫке Байрамғол ауылында 7 класты тамамлағандан һуң, ең һыҙғанып эшкә тотона - совхоздың сусҡаларын ҡарарға ҡушып ҡуялар уға. Үҙе һөйләүенсә, дуңғыҙҙар йөрөй торған урын кәртәләнмәгән булған, ә заман теле менән билдәләгәндә, «электркөтөүсе» алымы ҡулланылған. Диаметры 2 мм самаһы булған сымдар һуҙып эшләгәндәр быны. Ошондай күренеш беҙҙең районда, баҡһаң, 1956 йылда уҡ файҙаланылған икән.



*Сания һәм Рәис Шәмиғоловтар*

Артабан Рәис Шәмиғолов һөнәрселек училищеһында уҡып, механизатор һөнәрен үҙләштерә. Машина-трактор оҫтаханаһында слесарь булып эшләгән ваҡытында егеткә комбайн ремонтларға ҡушалар. Тап ошонда унда комбайнда эшләргә теләү хыялы барлыҡҡа килә лә инде. Тәүҙә комбайнсы ярҙамсыһы итеп тәғәйенләһәләр, һуңынан «баҫыу карабын» да ышанып тапшыралар. Рәис Сәлмән улының хеҙмәт стажы 44 йыл, шуның 32 йылын ул тик комбайнсы булып эшләй. Ауыр шарттарҙа, ҡыйынлыҡтарға бирешмәй 15 йыл дауамында беренселектән төшмәй, ә республикала 2-се урында була. Рәис Шәмиғолов районда беренселәрҙән булып уңыш йыйыу осоронда звено ысулын индерә. Алдынғы механизатор, комбайнсы эшендә юғары күрһәткестәре өсөн «Уңыш батыры», «Иң яҡшы комбайнсы», «Ярыш еңеүсеһе» кеүек вымпел-таҫмалар, дүрт тиҫтәләп грамоталар, димпломдар менән наградлана. «Коммунистик хеҙмәт ударнигы» билдәһе, «Почет билдәһе» ордены, «Фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн», «Хеҙмәт ветераны» һәм башҡа миҙалдарға лайыҡ. Ә 2011 йылда Рәис Шәмиғоловты ололап, уға «Учалы районының Почетлы гражданы» тигән маҡтаулы исем бирелә. Ҙур ышаныс белдереп, бер нисә йыл рәттән ауыл һәм район Советы депутаты итеп һайлайҙар, партком секретары, директор урынбаҫары ла булып эшләй ул. Тормошонан да, эшенән дә уңа Рәис Сәлмән улы. Унын ышаныслы тылы, бар башланғыстарын күтәрмәләп тороусы ҡатыны Сания тураһында ла айырым яҙып үтмәй булмай.

Сания Ғиләж ҡыҙы 1939 йылда Туңғатар ауылында тыуған. 7 класты тик яҡшы билдәләргә генә тамамлаған ҡыҙҙың артабан уҡырға теләге көслө булһа ла, тормош үҙенсә хәл итә шул уның яҙмышын. 13 йәштән хеҙмәт юлын башлап, ауырыу әсәһен ҡарарға тура килә ҡыҙ балаға. Шулай булһа ла ул төрлө курстар тамамлай, гел белем алырға тырыша. Шул рәүешле комбайнсы, тракторсы, һатыусы танытмаларын ала. Эшләгән ерендә һынатмай, уның фотоһы гел почет таҡтаһынан төшмәй. Сания апай ғүмер буйы йәмәғәт эштәрендә лә ҡайнап йәшәй. Ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе, халыҡ заседателе, комсомол, партия ағзаһы була. Дөйөм хеҙмәт стажы 42 йыл! Хатта хаҡлы ялға сыҡҡас та ҡул ҡаушырып ултырмай. Баҡсаһында үҫтергән сәскәләре тирә-йүнгә хуш еҫ бөркөп, тотош урамды йәмләй. Бынан тыш, Сания апай ҡул эштәренә ифрат маһир. Ырғаҡ менән төрлө сәскәләр, диван, ултырғыс япмалары, иҙәнгә йәйергә түңәрәктәр бәйләй. «Был шөғөл миңә күңел тыныслығы бир», - тип йылмая ул үҙе. «Йәшлек» гәзите үткәргән «Халҡым йөҙө - 100 ҡатын-ҡыҙ» конкурсы һөҙөмтәһенә лә индерелгән.

Сания һәм Рәис Шәмиғоловтар өс бала тәрбиәләп үҫтергәндәр. Өлкән ҡыҙҙары Римма медицина институтын тамамлап, Өфө ҡалаһы дауаханаһында провизор булып хеҙмәт юлы үтә. Бәләкәй ҡыҙҙары Светлана Өфө ҡалаһында «Башкирэнерго» компанияһында юрист булып эшләй.

Урал улдары - юрист, милиция полковнигы. Афған һуғышы ветераны. Тәүҙә Башҡорт дәүләт ауыл хужалығы институтын, һуңынан БР Эске эштәр министрлығының Өфө юридик институтын тамамлай. Учалы ҡалаһы һәм районының эске эштәр бүлеген етәкләй һәм 2006 йылда БР эске эштәр министры урынбаҫары, кадрҙар идаралығы начальнигы итеп тәғәйенләнә. Тик Урал Рәис улының ғүмере генә бик ҡыҫҡа була шул, яҡындарын бик иртә ҡалдырып китә. Яҡташтары уны онотмай - Комсомольск урта мәктәбендә Урал Шәмиғолов иҫтәлегенә таҡтаташ ҡуйылған, йыл һайын турнир ҙа уҙғарыла.

Ғөмүмән, Шәмиғоловтар ғаиләһе үҙҙәренең тырыш һәм фиҙаҡәр хеҙмәте менән яҡташтары күңеленә онотолмаҫлыҡ яҡшы тәьҫораттар һалған. Улар хаҡында Ишбулды Мөхәмәт улы Ихсанов ижад иткән шиғыр юлдары менән тамамлайһы килә мәҡәләне.

Эшкә дәртле Рәис ағай
Иген урҙы көҙҙәрен.
Ҡыштарын беҙҙе уҡытты,
Үттек белем үрҙәрен!
СПТУ-ла уҡыныҡ,
Иһ, беҙ шаян малайҙар.
Комбайнды йөрөтөргә
Өйрәтте дан ағайҙар!
Совхозда келәттә эшләне
Уңған Сания апай.
Киң күңелле, һылыу, ғәҙел,
Йөҙө - алсаҡ ҡояштай.
Кәрәк булған саҡта
Гел һуҙҙы ярҙам ҡулын.
Әйтте һәр саҡ: «Юлдарығыҙ
Тик уңып торһон һеҙҙең».
Был ғаиләне ҙур совхозда
Хөрмәт итте күпселек.
Һәм мәңгегә онотмаҫтар,
Хәтер бит ул мәңгелек.

**Мират ҒИЗЗӘТУЛЛИН,**
**Илсеғол ауылы.**

Хәтер

# «Герой партаһы» булдырылды

***13 апрель көнө ҡаланың 5-се мәктәбендә Украинала барған махсус операцияла батырҙарса һәләк булған ҡаһарман яҡташыбыҙ, кесе сержант, махсус тәғәйенләнештәге штурм төркөмө пулеметсыһы Тимур Радик улы Килмөхәмәтовтың яҡты иҫтәлегенә «Герой партаһы»н асыу митингы үтте.***

Былтыр тап ошо көндө батыр егет хәрби задание үтәгәндә һәләк була, бының өсөн үлгәндән һуң Батырлыҡ һәм Шайморатов ордендары менән бүләкләнә.

Герой партаһы уҡыусыларҙа Ватан тарихына хөрмәт уятыу, илһөйәрлек тәрбиәләү, илебеҙҙең үткәненә, бөгөнгөһөнә һәм киләсәгенә байҡау яһау, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына, тыл һәм хеҙмәт ветерандарына, хәрби хәрәкәттәрҙә һәм махсус операцияларҙа ҡатнашыусыларға ихтирам уятыу, уларҙың исемдәрен мәңгеләштереү, рәхмәт белдереү маҡсатында булдырылған проект.

Сарала Тимурҙың ата-әсәһе, олатай-өләсәйҙәре, туғандары, яҡындары, мәктәп коллективы ҡатнашты. Герой партаһын асыу хоҡуғы яугирҙың әсәһе Роза Дамир ҡыҙы һәм атаһы Радик Ринат улы Килмөхәмәтовтарға бирелде.

Партала Тимурҙың хәрби фотоһы, ҡыҫҡа ғына ғүмер эсендә өлгәшкән уңыштары яҙылған, наградалары һүрәтләнгән.

Тимур Радик улы 1999 йылдың 3 декабрендә Учалы ҡалаһында тыуа. Мәктәп йылдарында уҡ спорт менән әүҙем шөғөлләнә, тарих фәнен ярата, хәрби-патриотик әҙерлеккә ныҡлы иғтибар бүлә. Уҡығанда уҡ киләсәктә хәрби булыу хыялы менән яна. 2017 йылдың ноябрендә хәрби хеҙмәткә алына, 212-се танк ғәскәрҙәренең хәрби үҙәгендә уҡый, 2019 йылда контракт нигеҙендә хеҙмәтен дауам итергә ҡарар итә. Төньяҡ Кавказда хәрби бурысын үтәй. Былтыр февралдә Украинаға хәрби операцияға ебәрелә.

Митингта ҡатнашыусылар ҡаһарман хаҡында яҡты иҫтәлектәр менән уртаҡлашты, уҡыусыларҙы илһөйәр булып үҫергә өндәне, ошондай геройҙар менән ғорурланырға һәм бер ваҡытта ла уларҙың беҙҙең тыныс тормош өсөн ҡорбан булыуын оноторға ярамағанлығын еткерҙеләр. Яугирҙы бер минут тынлыҡ менән иҫкә алдылар.




*Тимур Килмөхәмәтов иҫтәлегенә булдырылған парта*

- Тимур беҙҙең тәүге ейәнебеҙ, беҙ уны бик ныҡ яраттыҡ. Бәләкәйҙән эргәбеҙҙә булды. Һалдат бурысын үтәп ҡайтыуын түҙемһеҙлек менән көтөп алдыҡ. Артабан үҙ теләге менән контракт нигеҙендә хеҙмәт итергә ҡалды, командировкаларға йыш йөрөнө. Ҡайҙа ғына булһа ла иҫән-һау йөрөһөн, фәрештәләре һаҡлаһын тип теләй инек, үкенескә күрә һуңғы командировкаһынан ҡайта алманы, улыбыҙ беҙҙе ҡара ҡайғыларға һалып, йәшләй генә һәләк булды. Уның юҡлығына һаман ышанмайбыҙ, ҡайтыр тип көтәбеҙ, - тип ауыр хәтирәләре менән уртаҡлашты олатаһы Ринат Килмөхәмәтов.

Илсеғол ауылының ҡаһарман улы, махсус хәрби операцияла батырҙарса һәләк булған кесе сержант, Батырлыҡ һәм Шайморатов ордендары кавалеры Илдус Ильяс улы Мостафиндың исемен мәңгеләштереү буйынса саралар дауам итә. Ул уҡыған Мулдаҡай мәктәбендә лә «Герой партаһы» булдырылды. Был класта уҡыусыларға илһөйәрлек һәм ватансыллыҡ сифаттарын тәрбиәләү маҡсатында батырлыҡ дәрестәре, төрлө хәтер һәм ҡәҙер саралары үтәсәк. Уҡыусыларҙа үҙҙәре белем алған мәктәптә ҡасандыр ҡаһарман яугир уҡыуы хаҡында белеп, уның партаһын күреп ғорурлыҡ хисе уянасаҡ, батырҙарға ҡарата хөрмәт һәм ихтирам хисе тыуыр, ти мәктәп коллективы ла.

Илдусты белгәндәр уны яҡты хәтирәләр менән иҫкә алдылар. «Герой партаһы» уның матур, аҡыллы, ҡыйыу, шат һәм изге күңелле, йомарт, ышаныслы егет булғаны хаҡында һөйләй.

Илдус Мостафин 1979 йылдың 13 мартында Ахун ауылында донъяға килә. 1997-1999 йылдарҙа армияла хәрби бурысын үтәй, хәрби-һауа ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итә, өлкән водитель була. Өс тапҡыр контракт төҙөп, һалдат бурысын үтәй. Таджикстанда хеҙмәт итә, ҡаһарманлығы һәм ҡыйыулығы өсөн «Гвардия» билдәһе менән наградлана. Артабан хәрби хеҙмәтен Сыбаркүлдә дауам итә. Былтыр үҙ теләге менән Украиналағы махсус операцияла ҡатнашырға теләк белдерә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, 25 майҙа хәрби бурысын үтәгәндә ҡаты яралана. Мәскәү ҡалаһында Вишневский исемендәге госпиталдә дауалана. Тик яраһы бик ҡаты була, 10 август көнө йөрәк етешмәүсәнлегенән һәләк була.

«Герой партаһы»нда тик яҡшы өлгәшкән уҡыусылар, йәмәғәт эшендә актив ҡатнашыусылар һәм спортсылар ултырып уҡыясаҡ.

**Нурия ШӘРИПОВА.**

Яҙмыштар

# Матур көн

***«Аҡыл өйрәтмәгеҙ миңә! - тине...». Эйе, тап шулай тине, күҙен дә йомманы. Ауыҙы ла ҡыйшайманы. Теле ҡоро... Тфү! Үсен ҡандырғансы ҡутара һоғондороп ирешә лә алмай бит әле Ғәйшә. Хатта эстән генә ҡарғай ҙа алмай.***

Алмай, сөнки анауындай һүҙ ташлап ултырған йүнһеҙ бисә унының килене. Берҙән-бер улының ҡатын булған нәмәһе, йәндәй күргән ейәненең әпсәһе. Ошо ике сәбәп тә, һәм әлеге кеше араһындағы бит йөҙҙөгө булған оятсылыҡ та, унының ауыҙына йоҙаҡ һала. Ғорур ҡәйнә дәрәжәһен, боронғо ҡанундар аша ҡарағанда, әле ишек төбөнән дә үтеп китер хоҡуғы булмаған йәш килен ишараты менән сар-сор талашып тороу кимәленә төшөргөһө килмәй. Борола ла сығып китә. «Тысты ул һиңә» тигән була торғайны әсәһе, атаһы әбейенең хәбәрен һанға һуҡмай китеп барһа. Ғәйшә лә шуны күрһәтте булды килененә, хатта ишекте япҡанда ирендәре лә ҡыбырланы:

- Тысайым да!..

Әйтерен әйтерең дә быныһын, ә һин уны башҡарып ҡара? Тура мәғәнәһендә тимәйем инде, күсмә мәғәнәһендә лә була торған хәлме һуң әле? Шул бер остандаған нәмә арҡаһында улынан, унан да бигерәк ейәненән баш тарта ала буламы? Ә инде тегеләрен - айырырһың! Әллә нимәһен шул хәтлем генә лә мөкиббән киткән бит улы бисәһенә. «Мәғинетте нәмәһе» тип һуҡрана торғайны әлеге әсәһе улдарын арбаған килендәренә үҙҙәре ишетмәгәндә. Шул көн килде бөгөн Ғәйшәгә лә. Киленен һыртынан әрләп ҡайтып бара. Ә уныһы, мин булмағанда мине туҡмаһағыҙ ҙа ярай, тигән шикелле ирәйеп ултыра микән? Ҡәйнәне урынына ҡуйҙым әле, ҡайһы яр унығы, ҡайһыһы минеке икәнде күрһәттем, тип кинәнәлер...

Ауыр кисерҙе был сыйышты ҡатын. Эйе-эйе, дөрөҫ уҡынығыҙ - ҡатын. Өләсәй булһа ла әбей түгел әле ул. Олораҡ инде ололоғон, алтын юбилейҙың алмаһын ашаған, әммә үҙен ҡарсыҡтар сафына индермәй. Шартлата баҫып эшләп йөрөй, пенсияға алыҫ әле. Туҡта... барыһы ла үтә генә лә яҡшы һымаҡ ине лә һуң. Нимәнән сыҡты, ҡайҙан башланды һуң әле был аңлашмаусанлыҡ? Ғәйшә улы менән бер ҡайғыһыҙ, бер низағһыҙ йәшәп ята ине. Унын тормошона ҡыҫылмай ҙа ине һымаҡ. Улы институтты тамамланы ла, бер фирмала хеҙмәт юлын башланы. Беренсе йыл өйрәнде, икенсе йыл күренде, өсөнсө йыл һөҙөмтәләргә өлгәште тигәндәй. Унан үҫтерҙеләр. Эш хаҡы ла ярайһы ғына, тотошлайы менән үҙ аллы булды. Әсәһен ҡыуандырып шулай йөрөп кенә ятҡанда... Юҡ, бәлә килде, тип тә әйтә алмай ул. Әммә шатлыҡ та тип алдаша алмай. Көтөлмәгән хәл. Бына шулай дөрөҫөрәк булыр. Көтөлмәгән хәл сығып ҡуйҙы: улы ҡыҙ эйәртеп ҡайтты. Фирмаға яңы килгән йәш белгес икән. Улы шулай тип кенә таныштырһа ла, Ғәйшәнең мейеһен сыйып ҡына бер һиҙемләү үтте. Быны иҫкәртеп ҡуяйым әле тип уйлап ҡына йөрөй ине, улы отпускы тураһында һүҙ сығарҙы:

- Быйыл ялға мине көтмә, әсәй. Минеке көҙгә ҡала.

- Ниңә? - тип һораны ҡатын аптырап. Сөнки, улар йәйге ялды бергә үткәрергә өйрәнгән.

- Самираның отпускыһы көҙгә генә.

- Кемдең? - Кем икәнлеген бик яҡшы хәтерләһә лә, ҡабатлап һораны. Һәм артабанғы һорауы менән үҙен һатты ла:

- Ә при чем тут Самира?

Улы аҙыраҡ ҡына өндәшмәй торҙо, әйтерен үлсәне, ахыры:

- Беҙ дуҫлашабыҙ, әсәй. Теге юлы аңлағанһыңдыр тип уйлағайным. Ялды бергә үткәрергә һөйләштек... һәм бергә йәшәргә.

- Ә?

- Һинең фатихаң менән, әлбиттә. Өйләнешеп.

Фатиха ҡасан бирелгән дә, өйләнешеү нисек үткәнен аныҡ ҡына хәтерләмәй ҙә инде Ғәйшә, йәштәргә тантана ла, ҡунаҡтарға байрам булһа ла, яңғыҙ ул үҫтергән ҡатынға тауҙай мәшәҡәттәр ине был сара. Ярай әле улы үҙе аҡса йыйған. Әммә бит әле ул аҡсалар үҙҙәре генә барыһын да хәл итмәй.

Баштан уҡ айырым сыҡтылар. Фатирҙа бер бүлмә буш тора, тип бот сапҡайны ла, улы өҙә һуҡты: беҙ шулай хәл иттек. Йә, Аллаһ, берәүҙәр хәл иткән икән. Диван бирәйем тигәйне - баш тарттылар, яңыһы бар. Һаҡлап тотҡан баласын һөйрәп сығарғайны - алманылар, хәҙер мода икенсе, ти. Имеш... Картина тотоп барғайны, улы кире алып килде:

- Әсәй, Самира айырым стиль менән биҙәй бит фатирҙы. Унын үҙ вкусы. Һин был картинаңды берәйһенә бүләк итерһең лучше.

Иренен ҡымтыны ла, сабырлығын бөрөп тотоп, бер сәнсә ҡарау менән генә сикләнде Ғәйшә. Мәле етер - әйтермен, тип уйланы. Тик мәле етмәне лә етмәне. Килен ауырлы булып, уға кәңәш иткәндәре лә батманы. Хәҙер ауырлыларҙың да әллә ни башҡа тәртиптәре икән. Бала тыуғайны - үҙҙәренсә. Әйтерһең, Ғәйшә бала тапмаған да, бәпләп үҫтермәгән. Һалыуы ла, кейендереүе лә, имеҙеү ваҡыттары ла төптө башҡа икән даһа. Нимә тип кенә өйрәтһә лә, замана педиаторҙары ла, китаптары ла, хатта интернет та унан аҡыллы булып сыҡты ла торҙо. Был тамам йәненә тейҙе өләсәйҙең.

- Һеҙ ниңә минең менән һынашмайһығыҙ ул? - тине ул бер көн улына.

- Әсәй, әйҙә юҡтан проблема яһама? Беҙ баланы ҡарай беләбеҙ, тәрбиәләй алабыҙ. Ейәнең менән күрешеп тораһың, алып ҡалаһың, бер ҡаршылыҡ юҡ бит. Ҡалған барыһын да беҙ үҙебеҙ, зинһар - яраймы?

- Һине үҫтергән әсәйеңә ышанмайһың, ә барлығы ике йыл белгән бер баймабашҡа яҙмышыңды башкөллө тапшырғанһың икән.

- Әсәй?.. - улы көлкөгә һалыштырып ҡына ҡуймаҡсы.

- Көлмә әле. Егерме өс йәшлек ҡыҙҙа ниндәй аҡыл булһын әле? Ул күңеленә нисек ята - шулай эшләй. Ә әсәйең төптән уйлап...

- Самираға үҙенә әсәй булырға бир. Тығылма шунын донъяһына, мине ике араға ҡуймағыҙ.

- Ата-а-аҡ! Тығылам икән дә мин, ә?

- Әсәй... - улы хәҙер инде ялынғандай ҙа итте. - Үҙ тормошоң юҡмы ни һинең? Аралаш, ана, әхирәттәрең менән. Берәй түңәрәккә яҙыл. Әйҙә, бассейнға абонемент алып бирәйем? Бәлки, шифаханаға барып йөрөп ҡайтыу кәрәктер һиңә? Дуҫ табып ал үҙеңә, в конце-то концов, театрға йөрөргә, бергәләп сәй эсергә... Яңғыҙ ҡартайғансы...

Быңдайҙы уҡ көтмәгәйне улынан Ғәйшә. Асыуланып эйәген күтәрҙе лә... өндәшмәне. Улына өндәшмәне, әммә килененә әйтте:

- Ниңә улымды миңә ҡаршы ҡуяһың? Һин уға, киреһенсә, әсәйеңде тыңла, ул тәжрибәле кеше, тип әйтергә тейешһең. Берәй нәмә башҡарыр булһағыҙ, әйҙә, әсәйеңә барып кәңәшләшеп киләйек, тиген. Әле ҡарайым, ат хаҡына өҫтәл алып ултырҡанһығыҙ. Шуны миңә әйтһәгеҙ, осһоҙорағын да табыша инем. Баланы ла йәйге кейемгә иртә күсереп тораһың, өшөрөн уйлай алмайһың, ә ирендең ҡолағын да, күҙен дә томалай беләһең. Мин бит...

Баяғы һүҙҙе әйтте лә һалды шунда килене. Тыңлап-тыңлап торҙо ла, ысҡындырҙы бит:

- Аҡыл өйрәтмәгеҙ миңә! Ҡалғанын беләһегеҙ...

Шул хәлдән һуң ысынлап уйға ҡалды Ғәйшә. Әллә улы менән килене хаҡлы микән? Артыҡ тығыламы ул йәш ғаиләгә? Күп өйрәтәме? Маҙаһыҙлаймы икән? Ялҡытамы? Һуң... шулар өсөн көн итеп ята түгелме ни? Ғүмерен шуларға бағышлап... Унан тағы, кәрәкме һуң уларға был бағышлау? «Үҙ тормошоң менән бул» тип тора бит улы ла. Бисәһенең һүҙенә төшөптөр инде...

Оҙаҡ ҡына эсе бошоп йөрөнө. Үҙен йәлләп илап та алды. Шулай ҙа ул аңһыҙ ҡатын түгел, был хәл-ваҡиғаларҙың нигеҙендә уға аңлашылып етмәгән, әлегә уға таныш булмаған ниндәйҙер тәбиғи ҡанундар ятыуын да һиҙенә, әммә күңел тигән нәмә уларҙы төшөнөргә теләмәй.

...Ауыр кисерештәр эсендә иғтибарһыҙ ғына үтеп-сүтеп йөрөгәндәрҙе күҙәтте. Ҡала паркында ял иртәһендә лә халыҡ етәрлек. Кемдәрҙер спорт артынан ҡыуа, кемдәрҙер эте артынан. Унын кеүек һауа һуларға сыҡҡандар ҙа етәрлек. Эскәмйәнең осондағы ҡатын, ана, күҙлеген төҙәтә-төҙәтә китап уҡый. Уҡыусыға «ялп» итеп ҡарап алғайны, тегеһе лә ҡарашын күтәрҙе.

- Ғәфү итегеҙ... – тип мығырлаған булғайны, эскәмйәләше шуны ғына көткән, тиәрһең:

- Ваҡыт үткәреү өсөн генә ултырам. Бына, бынауындағы йәшниккә һалып кителгән китаптарҙы ҡараштырып.

Әйләнеп баҡһа, ысынлап, парк эскәмйәләре артына махсус йәшниктәр ҡуйылған да, кешеләр уҡыған йәки кәрәкмәгән китаптарын шунда ҡалдырып китә алалар икән, ял итеүселәр алып уҡый, үҙҙәренекенә алмаштыра, күрәһең.

- Ҡалай шәп уйлап тапҡандар, - тип ҡуйҙы Ғәйшә лә.

- Эйе, мин дә алып киләм, өйҙә ҡый булып ятҡанды ошонда ташып бөттөм, алып китәләр. Ғәйшә нимәлер әйтергә тип хәбәр һайлағансы, телсән танышы яҡынраҡ шылып уҡ алды:

- Мин - Любовь Михайловна. Люба инде. Ә һеҙ?

- Ғәйшә... Га-и-ша, - тип ижекләп әйтеүенә, Люба артынан ҡабатланы. Унан үҙенсә асыҡлап та ҡуйҙы:

- Аиша тиһәм еңелерәк әйтелә. Бигерәк матур исем, индийский кинолағы һымаҡ.

Ғәйшә ризалашып баш ҡына ҡаҡты.

- Һеҙ... «һин»гә күсәйемме? Рәхмәт. Һин нимәгәлер борсолоп ултыраһың, эйеме?

- Күренеп үк торамы ни?

- Күренмәһә лә, ишетелә. Ауыр һулап ҡуяһың, ҡулдарың урын тапмай, тура ҡарап та күрмәйһең...

- Шулай-шул... - Ғәйшәнең ошо мәл әлеге ете-ят ҡатынға асылғыһы, эс серҙәрен һөйләгеһе килде лә китте. Берәүгә лә йөрәгендәге был төйөн хаҡында әйтә алмай бит ул,囗эштә ғаилә хәлен белгерткеһе килмәй һәм хатта әхирәттәренә лә әйткеһе килмәй. Беренсенән, улына тап төшөрөр һымаҡ, икенсенән, үҙен бер кәрәкһеҙ әйбер һымаҡ итеп күрһәтә алмай, өсөнсөнән... Сәбәптәре етәрлек инде.

- Нимә булды? Бәлки, мин ярҙам итә аламдыр? Йә, еңеллек өсөн генә булһа ла белдер... Ғәйшә бер генә тәрән һуланы ла, теҙҙе лә һалды:

- Улым өйләнгәйне... Матур ғына малайҙары бар. Айырымландылар. Бөтөнләй. Минән дә айырымландылар... Үҙ пландары, үҙ тормоштары, тәртиптәре... Ҡыҫылғанды теләмәйҙәр...

- Ә һиңә уларға барып ҡыҫылып йөрөү кәрәкме?

Быңдай һорауҙы көтмәгән



*Ғәйшә парктағы осрашыуҙан һуң, тормошҡа яңыса ҡарай башланы*

ҡатын йәнәшәһендәге ихлас тексәйеп ултырған аҡ бөҙрә сәслеһенә бер һирпелеп алды:

- Ну-у... Минең берҙән-бер улым да инде ул.

- Булһа һуң. Һинең мөлкәтең түгел бит. Уның шәхси тормошҡа хоҡуғы бар. Тем более ғаилә тормошона.

- Әсәйлек хоҡуҡтары ҡайҙа?

Олораҡ ҡатын йылы нур бөркөлөп торған түңәрәк зәңгәр күҙҙәрен ҡыҫа төштө:

- Әсәйлек хоҡуҡтары көсләп тағылмай. Һин күпме көсләшәсәкһең, шул тиклем улар һинән ҡасасаҡ.

- Шунан? Үҫтереп кеше иткән баламдан ҡолаҡ ҡағайыммы хәҙер?

Люба иплəп кенә ынтылып Ғәйшәнең өшөп барған ҡулын йомшаҡ ҡына устарына алды:

- Аиша, йөрәккәйем, бөтә файҙалы, уңышлы, ләззәт бирер эштәр, хәлдәр, хистәр ҙә теләк аша эшләнә. Теләкһеҙ булғаны ул ҡоро ирекһеҙләү, көсләү генә була. Һине бит балаларың яратмай түгел - шулай бит?

Саҡ ҡына уйланып алды ла, ризалашты ҡатын:

- Улай тип әйтә алмайым. Улым һәр ваҡыт хөрмәт итте, хатта иркәләтеп кенә йөрөттө, «әсәкәйем» тип тә ебәрә ине...

- Бына бит...

- Килен тураһында... насар түгел былай... Тик бына һуңғы әйткәне...

- Ул һинең тәрбиәңдә үҫмәгән, һинең талаптарыңа яуап бирергә лә тейеш түгел.

Киленең бит улыңдың ҡатыны, иренең башкөллө үҙенә булыуын теләй. Был - тәбиғи. Һин уларға был мөмкинлекте бир. Әле улар бер-береһенә танһыҡ, бәпәйен дә ҡыҙғаналыр йәш әсә. Яйлап барыһы ла урынына ҡайтасаҡ: ҡатындың үҙенә ваҡыт бүлгеһе киләсәк, ире менән балаһын һиңә тапшырып торорға ла теләге тыуасаҡ, һинең ярҙамың кәрәк буласаҡ, бәләкәскә өләсәй һөйөүен дә эҙләйәсәктәр әле.

- Әллә?.. Булыр микән улай?..

- Мин әйтте тиәрһең. Үҙем шул юлды үттем. Мин дә бит ҡыҙым кейәүгә сығып, улым өйләнгәс бөтөн донъяла бер үҙем ҡалғанмында, балаларыма кәрәкмәймен икән, тип уйланым. Паникаға бирелдем, тегеләрҙе шылтыратып ҡаңғырттым. Ҡайтығыҙ тип саҡыртып алдым, килһәләр бахырҙарымды һалҡынлыкта ғәйепләп, былай ҙа аптыранған күңелдәрен өҙгөләп ҡыялдым. Сашкамдың ялбарыулы күҙҙәре һаман да хәтеремдә алтын ғынамдың. «Ярай, әсәй, әйҙә мин эшемде лә, ғаиләмде лә ташлайым да, янаңа күсәм. Моғайын, минең уллыҡ бурысым һине бәхетле, ҡәнәғәт итеп йәшәтеүҙер», - тине бит был бер мәл. Шул ваҡыт башыма нимәлер барып еткәндәй булды. Нисек инде? Балам ниндәй ҡорбанға барырға тора, ә мин - яңғыҙмын, имеш... Ултырып уйлап алдым да, киттем психологка, унан төрлө әсбаптар уҡыным, яйлап эске донъямды ла, тышҡыһын да тигәндәй, йыйып алдым. Ни эшләп мин аяҡлы-ҡуллы, аҡыллы һәм үҙ аллы кеше башҡаларҙың иғтибарына улай мохтаж булырға тейеш әле?

Ғәйшә яңы әхирәтенә арбала биреп ҡарап ҡалды. Ә уныһы ярһып һөйләүен дауам итте:

- Үҙемде эштән һуң нимәгәлер бағышлау өсөн йогаға яҙылдым. Унда әллә күпме бисә-сәсә менән таныштым. Шундағы бер ҡатын изгелек хеҙмәте йәмғиәтенән булып сығып, уға эйәреп киттем. Хәҙер ауыр хәлгә ҡалған яңғыҙ ҡатындарға ярҙам итеүҙә булышам. Беләһеңме, күпме йәш әсәләр бала-саға менән урамда ҡала, ас ултыра, бәпесен ҡайҙа итеп эшкә барырға белмәй?

«Юҡ» тип баш сайҡай ғына алды тыңлаусы.

- Әгәр һин шуларҙы белһәң, мине улым ғаиләһенә тығылдырмай тип бошоноп ята ла алмаҫ инең. Теләһәң, әйҙә, төшкә тиклем беҙҙең менән бул. Мин бында Гөлнара тигән ҡатынды көтөп ултырам. Ошонда осрашырға һөйләштек. Ҡатын өс йәшлек ҡыҙын миңә ҡалдырып китә, беҙ балалар майҙансығында уйнап торабыҙ. Әсәһе йомоштарын башҡарып килгәнсе бала ҡараулы ла, туҡ та була. Теләйһеңме?

- Әл-лә-ә...

- О! Ана йүгерә минең бәләкәй әхирәтем!

Әсәһенән ысҡынып сабып килгән бала Любовь Михайловнаның итәгенә ҡапланды:

- Пиве-ет!

- Привет, ҡошсоғом. Йоҡо туйҙымы?

Бала артынан килеп торған йәш ҡатын эскәмйәнән ҡалҡынған апайҙар менән сәләмләште:

- Доброе утро, тетя Люба. Здрасьте. Как вы?

- Все хорошо, милая. Бына беҙ әхирәтем менән. Исеме Аиша. Бөгөн Гөлнурҙы бергәләп алып ҡалабыҙ, күңеллерәк булыр.

- Ҙур рәхмәт һеҙгә. - Үҙе ҡулындағы пакетының эсен барланы. - Тетя Люба, бында ике колготки һалдым, тирләһә тип алмаш футболка... Печенье, термос менән сәй, китаптары...

- Ярай-ярай. Беҙ нимә менән булырға икәнде белербеҙ. Һин ашыҡма, эшеңде ерено еткереп тамамлап ҡайт.

- Йүгерҙем улайһа.

Ҡатын китә биргәс, бәләкәсте етәкләп алып, майҙансыҡҡа юлланғанда, Люба аңлатып ҡуйҙы:

- Берәүҙәрҙең өйөн йыйыштырып, икенселәрҙең тәҙрәләрен йыуып килә. Йән аҫрарлыҡ аҡса яһап ала. Берәй аҙнанан тағы ла шулай сыға. Атаәсәһе юҡ, туғандары ла. Был ҡалаға эскесе иренән ҡасып килгән, нисек тә бәпесен үҫтерергә тырыша. Мин бәләкәсен алып ҡалып торам. Йәки үҙемдә, йәки уларҙа, йәки бына ошондай матур көндә урамда, паркта, баҡсала. Матур бит көн? Бигерәк матур!

Ғәйшә тирә-яғына ҡараап ҡуйҙы ла, хайран ҡалды: матур икән шул... Салт аяҙ, йылы, йәй башы...

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

Осрашыуҙар

# Учалыла - «Аманат»лы осрашыу!

***«Аманат» журналы Учалы районының мәктәптәрендә булып, уҡыусылар менән осрашты. Учалы ауылының Башҡорт гимназияһы, Талха Ғиниәтуллин исемендәге Ураҙ лицейы, Уральск филиалының Яңы Байрамғол, Бәләкәй Ҡаҙаҡкол мәктәптәре уҡыусылары, уҡытыусылар коллективы «Аманат» журналын ихлас ҡаршы алды.***

Сәфәремде Учалы ауылының Башҡорт гимназияһынан башланым. Гимназия, яңы ғына асылған стоматология кабинеты һәм бай экспонаттар тупланған музей менән танышып сығыуға, балалар менән тулы тамашалар залы «Аманат»ты сәләмләне. Сәхнә түрен «Аманат»тың логотибы биҙәй!

94 йыл буйы балаларға мәғрифәт таратыусы, тәрбиә һабаҡтары биреүсе, патриотизм темаларын яҡтыртыусы «Аманат» журналы менән яҡындан танышты гимназистар. Балалар яратып уҡыған рубрикалар, журналдың үҙендә һәм интернет төркөмдәрендә барған бихисап конкурстар тураһында белде. Уҡыусылар журналға яҙылырға, унық ижади эшендә, төрлө конкурстарында әүҙем ҡатнашырға, редакция менән хеҙмәттәшлек итергә тигән теләк белдерҙе. «Аманат» менән йыл әйләнәһенә бергә булған, хәбәрләшеп торған уҡыусылар журналдың «Йәш хәбәрсе» исеменә лә лайыҡ була алыуын белде.

Уҡыусылар менән әңгәмә бик йәнле һәм фәһемле барҙы. Әүҙем уҡыусылар «Аманат» журналдары менән бүләкләнде.

Осрашыуҙа мәғариф бүлеге методисы Зилә Ғизетдин ҡыҙы Шәрәфетдинова ла ҡатнашты.

- Учалы Башҡорт гимназияһында, ғөмүмән районда «Аманат»ты уҡыусылар күберәк булһын. Журналдың һәр һанын дәрестәрҙә фәһемле итеп ҡулланайыҡ. «Аманат» менән бергә телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, тарихыбыҙҙы өйрәнәйек, ижади шәхестәр булып үҫәйек, - тине Зилә Ғизетдин ҡыҙы уҡыусыларға.

Талха Ғиниәтуллин исемендәге Ураҙ аграр лицейының 5-се класы 2023 йылдың 2-се яртыһына «Бөтөн класс менән - «Аманат»ҡа!» акцияһына ҡушылған. «Аманат» журналын тотош класс менән уҡыусы балалар Пионер класында уҡый. Улар мәктәпкә йәм биреп, ҡыҙыл галстукта йөрөй. Бишенселәрҙең мәктәп тормошо ла күңелле һәм ҡыҙыҡлы үтә. Уҡыусыларҙың барыһы ла йырлай, бейеүгә лә маһир. Бында талантлы, дәртле, уҡыуға ла шәп уҡыусылар уҡый. «Аманат» журналын күңелле концерт номерҙары менән ҡаршы алдылар.

1906 йылда нигеҙ һалынған мәктәптең уҡыу планына 2017 йылда «Ауыл хужалығы нигеҙәре» тигән яңы предмет индерелә. Әлеге көндә уҡыусылар аттестаттан тыш тракторсы-машинист һәм ҡортсо һөнәренә эйә булып сыға. Бына ниндәй уңған балалар уҡый был лицейҙа!

Апрель айында Ҡоштар көнө. Ошо уңайҙан йыл һайын Көнъяҡ Урал ҡурсаулығы менән берлектә «Аманат» журналы төрлө конкурстар ойоштора. Быйыл Ҡоштар көнөнә арнап, уҡыусыларға филворд тәҡдим иткәйнек.

Уральск филиалы Яңы Байрамғол мәктәбенең 8-се класс уҡыусыһы, Әмир Мөхәмәтдинов филвордтың дөрөҫ яуаптарын табып, еңеүсе булды. Әмиргә Көньяҡ Урал ҡурсаулығының махсус бүләген һәм «Аманат»тың Рәхмәт кәлимәһен тапшырҙыҡ.

Бәләкәй Ҡаҙаҡкол мәктәбе «Аманат»тарға яҡшы таныш. Был мәктәптә «Аманат»тың «Йәш хәбәрсе»һе исеменә лайыҡ булған алдынғы уҡыусыбыҙ, ижади конкурстарыбыҙҙың еңеүсеһе, мәктәп тормошонда ла әүҙем ҡатнашыусы, ҡурайҙа ла, думбырала ла яҡшы уйнаусы, бейеүсе ҡыҙыбыҙ - Сөмбөл Йосопова белем алған.

«Аманат» журналын яҡты йөҙ менән ихлас ҡаршы алыусы бөгөнгө уҡыусылар ҙа Сөмбөл апайҙары кеүек үк ижади йәнле, һәр яҡлап та өлгөр балалар күренә. «Аманат» журналын да бөтөн мәктәп менән алдырып уҡырҙар тигән ҙур өмөттәр бағлайбыҙ уларға.

Әлеге мәлдә 2023 йылдың 2-се яртыһына «Аманат» журналына дәррәү яҙылыу бара. Шулай уҡ «Бөтөн мәктәп менән - «Аманат»ҡа!», «Бөтөн класс менән - «Аманат»ҡа!» акциялары ла дауам итә. Бөтөн класс менән журналға яҙылыусыларға «Аманат»тың Маҡтау билдәһе, ә класс етәксеһе-ойоштороусыға Рәхмәт кәлимәһе тапшырыла.

Учалы районы мәктәптәрендәге осрашыуҙы юғары кимәлдә ойошторған мәғариф бүлеге начальнигы Нурзидә Сәлимйән ҡыҙы Абдрахмановаға, мәғариф бүлеге методисы Зилә Ғизетдин ҡыҙы Шәрәфетдиноваға, Учалы ауылының Башҡорт гимназияһы директоры Альбина Важетдин ҡыҙы Заһиҙуллинаға, Талха Ғиниәтуллин исемендәге Ураҙ лицейы директоры Илнур Ринат улы Ғәйфуллинға, Уральск филиалының Яңы Байрамғол мәктәбе мөдире Линара Малбай ҡыҙы Фәтҡуллинаға, Бәләкәй Ҡаҙаҡкол мәктәбе директоры Дим Йомабай улы Фәтҡуллинға «Аманат»лы рәхмәттәребеҙҙе белдерәбеҙ, уңыштар теләйбеҙ.

**Зөбәржәт ЯҠУПОВА,**
**«Аманат» журналының яуаплы сәркәтибе.**




*Учалы уҡыусылары менән осрашыуҙар йәнле булды*

Конкурстар

# Афарин, ҡыҙҙар!

***Уральск ҡасабаһы балалар сәнғәт мәктәбенең «Наҙлыҡай» ансамбле Силәбе ҡалаһында үткән«Dream Fest» Ural - 2023» Бөтә Рәсәй бейеү фестиваленән ҙур еңеү менән ҡайтты.***

Һылыуҡайҙарыбыҙ « Бәхетле көн» патриотик бейеүе менән (авторы Абдрахманова Розалия Азамат ҡыҙы) II дәрәжә лауреат исеме яуланы. Ә коллективтың солисы Алтынай Килмөхәмәтова «Самауыр» бейеүен конкурсҡа сығарып, I дәрәжә лауреат исеменә лайыҡ булды. Афарин!



Ихлас ҡотлайбыҙ, яңынан-яңы уңыштар теләп ҡалабыҙ.

**Айрат НУРЕТДИНОВ.**

Хоҡуҡ даирәһе

# Мылтыҡ - яуаплылыҡ

***Ут ҡоралы эйәләренә һәр саҡ һаҡлау һәм йөрөтөүгә рөхсәттең ғәмәлдә булыу ваҡытына иғтибар итер кәрәк.***

Документтар ғәмәлдән сығырҙан бер ай алда рөхсәтте (лицензияны) оҙайтыу ғаризаһын үҙегеҙ теркәлгән урын буйынса БР буйынса Росгвардия идаралығының лицензия-рөхсәт бүлегенә биреү шарт. Электрон почта аша ла мөрәжәғәт итергә мөмкин: Берҙәм дәүләт хеҙмәтләндереүҙәре порталы: https://www.gosuslugi.ru.

Йәмәғәт именлеген һаҡлау маҡсатында башҡа талаптарҙы ла тайпылышһыҙ үтәү шарт. Шул иҫәптән: йәшәү урынын алмаштырғанда, ике аҙна ағымында яңы адрес буйынса ҡоралды иҫәпкә ҡуйыу тураһында лицензия-рөхсәт бүлегенә белдерергә; ҡорал алғас, ике аҙнанан да ҡалмай лицензия-рөхсәт бүлегендә теркәргә. Үрҙә әйтелгән сроктарҙы күҙәтмәгән осраҡтарҙа административ яуаплылыҡ ҡаралған.

Ҡорал ышаныслы урында һаҡланырға, сит кешеләр ала алмаҫҡа тейеш. Юғала йә урлана икән, кисектермәй лицензия-рөхсәт бүлегенә йәки ошо ваҡиға урыны (үҙегеҙҙең теркәлеү урыны) буйынса эске эштәр бүлегенең дежур часына яҙма рәүештә мөрәжәғәт итергә бурыслыһығыҙ.Граждандар ҡоралы сафтан сыға икән, күҙәтеү аҫтында юҡ итеү, иҫәптән төшөрөү өсөн шулай уҡ лицензия-рөхсәт бүлегенә тапшырыу талап ителә.

Ут ҡоралы эйәләре хәүефһеҙлек талаптарын үтәмәй, эскеселек менән мауыға, оҙайлы ваҡыт сирләй йә вафат булған икән, туған-тыумасаһы, ғөмүмән, был хаҡта белгән бөтә граждандар Росгвардия идаралығына 8(34791)2-02-99, 8(34792)3-43-89 телефон номерҙары буйынса йәки эске эштәр бүлегенең дежур часына хәбәр итеүҙәре һорала.

Шуны ла иҫкә төшөрәйек: ут ҡоралын һаҡлауға һәм йөрөтөүгә рөхсәт булған осраҡта ла, митинг-демонстрацияларҙа, башҡа йәмәғәт сараларында, мәғариф учреждениелары биләмәләрендә, төнгө ваҡытта эшләгән, хәмер менән сауҙа иткән ял-күңел асыу урындарында (законлы рәүештә һаҡ башҡарған кешеләрҙән тыш) йөрөтөү ҡәтғи рәүештә тыйыла. Әлбиттә, иҫерек килеш ҡорал йөрөтөргә бер осраҡта ла ярамай. Ошо талаптарҙы үтәмәгән өсөн рөхсәт ғәмәлдән сығарыла, ҡорал тартып алына. Ғөмүмән, ҡорал әйләнешенә ҡағылған ҡағиҙә-закондарҙы үтәмәгән өсөн дисциплинар, административ, енәйәт яуаплылыҡтары ҡаралған, сөнки үтә ауыр, фажиғәле эҙемтәләргә килтереүе мөмкин.

**Фәнис ХӨСӘЙЕНОВ, бүлектең өлкән инспекторы.**

*Ысын күңелдән ҡотлайбыҙ!*



Ҡалуй ауылында йәшәүсе эшһөйәр, изге, уңған, ихлас күңелле, ярҙамсыл, һөйөклө киленебеҙ

**Лидиә Мөхәмәт ҡыҙы һәм баҫалҡы, етмеш төрлө һөнәргә эйә ҡәйнешебеҙ Азат Йомабай улы КИЛМӨХӘМӘТОВТАРҘЫ көмөш туйҙары, Азат ҡәйнешебеҙҙе 50 йәшлек юбилейы менән ҡотлайбыҙ!**

Ҡыҙҙарығыҙҙың ихтирам-хөрмәтен, хәстәрен, күңел йылыһын тойоп, шатлыҡ- ҡыуаныста, тән сихәтендә, йән тыныслығында, именлектә, ҡайғы-хәсрәтһеҙ, мул тормошта, бер-берегеҙгә терәк-таяныс булып ғүмер кисерергә яҙһын.

Ғүмерҙәрҙең әле башы ғына<br>
Туйығыҙҙың бары көмөшө.<br>
Алтын, алмас туйға тиклем<br>
Дуҫ йәшәгеҙ һөйөп-һөйөлөп.

*Иң изге теләктәр менән - Ҡоҙабаевтар, Рәхмәтуллиндар ғаиләләре. Хәйбулла районы, Өфө ҡалаһы.*



Мулдаҡай ауылында тыуып үҫеп, Учалы ҡалаһында йәшәүсе ҡәҙерлебеҙ -

**Тәнзилә Исмәғил ҡыҙы ҺАҘЫЕВАНЫ (ШӘРӘФЕТДИНОВАНЫ) 70 йәшлек күркәм юбилейы менән ихлас ҡотлайбыҙ!**

Йор һүҙле, эш һөйөүсән Тәнзилә һеңлебеҙ, апайыбыҙ йырлай-йырлай, йүгерә-йүгерә атлап, ошо матур юбилейына килеп тә етте.

Бөгөнгө көнгәсә ул йәшлек дәртен һүндермәй, яҙмыш ауырлыҡтарына баш эймәй, йыр-моңға ғашиҡ булып, тәбиғәтте, ерҙе яратып, бар күңелен баҡсасылыҡҡа һалып, уй-кисерештәрен шиғыр юлдарына теҙеп, ихлас донъя көтә.

Хөрмәтле һеңлем, апайыбыҙ! Беҙ һиңә ныҡлы һаулыҡ, хәйерле ғүмерҙәр теләйбеҙ! Балаларыңдың, ейән-ейәнсәрҙәреңдең йылыһын тойоп, шатлыҡ-ҡыуаныстарға төрөнөп, илһам, иман нурҙарына бөркәнеп, беҙҙе ҡыуандырып йәшә лә йәшә!

*Иң изге теләктәр менән - Әминә апайың, Гөлназ, Мәмдүҙә һеңлеләрең, Азамат ҡустың, Юлиә ҡыҙың һәм уларҙың ғаиләләре.*


СЛУХОВЫЕ АППАРАТЫ
23 апреля
с 10.00 - 13.00 ч.
Учалы, Медцентр "ТАБИБ"
ул. Ленина, 25 Б, 8-902-869-57-22



Учалинский инкубатор
ЕЖЕДНЕВНО РЕАЛИЗУЕТ
суточных и подрощенных цыплят бройлера, суточных гусят, утят, мулардов, индюшат, несушек, петушков.
Спец. корма. Скорлупа.
село Учалы, ул. Лесная, 3.
8 965 932 08 71.
ОГРН 310028007500220 Реклама



БУРЕНИЕ СКВАЖИН под воду
Договор. Качество. Гарантия
8-961-050-00-69
Рассрочка до 6 мес.
vk.com/s.burenie
ОГРН 323028000012762 Реклама

**Продам**
**– Кур (молодки); бройлеров, гусят, утят, мулардов.** Тел.: 89603893855.

**Һатам:**
**– һыйыр, быҙауы менән, башмаҡ.** Тел.: 89272350475.

**Куплю:**
**– бычков, коров, телок.** Тел.: 89093452117.
**– бычков, овец.** Тел.: 8927-2187787.
**– картофель, семена картофеля, морковь, свеклу.** Тел.: 89061001520.
**– молодняк КРС и коров..** Тел.: 89638948899.

**Иғтибар итегеҙ!**
**Иғландарҙы эш көндәрендә тәнәфесһеҙ ҡабул итәбеҙ. Адрес: Учалы ҡалаһы, Төҙөүселәр урамы, 16 (2-се ҡат). Тел.: 6-06-92.**

«УРСУЛА» йәмғиәте
теш протезлау буйынса хеҙмәттәр күрһәтә.
Протездар - 6 мең һумдан алып.
*Пенсионерҙарға - ташлама!*
Адресы: Учалы ҡалаһы, Башҡортостан ур., 21.
Белешмәләр өсөн тел.: 8-965-945-01-10.
Лиц.№ Л041-01170-02/00580087 ОГРН 1210200030655

**Был реклама блогының майҙаны 7 кв.см. Хаҡы - 266 һум.**

Бында һеҙҙең иғланығыҙ булыр ине.

**ПРОДАМ бройлерных цыплят** (суточные, подрощенные).



**Адрес: с. Кунакбаево. Тел.: 89090842506, 89603803328.**

**Продам:**
**– профнастил. Доставка.** Тел.: 89677494236.
**– кур молодок.** Тел.: 896039-65151.
**– банную печь. Доставка** Тел.: 89659293838.

Бында һеҙҙең иғланығыҙ булыр ине.



**«Яйыҡ».** (12+) **Учалы районы һәм ҡалаһының ижтимағи-сәйәси гәзите.**

**Гәзитте ойоштороусылар:** Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы һәм Башҡортостан Республикаһының «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП-ы. Гәзит Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһендә күҙәтеү буйынса Федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығында теркәлде. **Теркәү номеры:** ПИ № ТУ 02-01481 06.11.2015 й. **Нәшер итеүсе адресы:** Башҡортостан Республикаһының «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП-ы, 450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13. **Мөхәрририәт адресы:** 453700, Башҡортостан Республикаһы, Учалы ҡалаһы, Төҙөүселәр урамы, 16. **Телефон: 6-06-92**, **сайттың адресы: https://yaikrb.com.ru. E-mail: jaik_1@mail.ru.** Гәзит сығыштарына ҡарата килгән хаттарға яуап бирелмәй, ҡулъяҙма, фотолар рецензияланмай, кире ҡайтарылмай. Автор фекере редакцияныҡы менән тап килмәҫкә мөмкин. Гәзиттә баҫылған иғлан һәм рекламаларҙың йөкмәткеһе өсөн редакция яуап бирмәй. Гәзит редакцияның компьютер үҙәгендә йыйылды. **Белорет мәғлүмәт үҙәге:** Башҡортостан Республикаһының «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП-ы филиалында баҫылды. 453500, Башҡортостан Республикаһы, Белорет ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 55/1. Хаҡы ирекле. Баҫма матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары буйынса федераль агентлыҡтың финанс булышлығында сыға. **Баҫма күләме:** 6 баҫма бит. **Баҫма индексы:** 50682. **Заказ:** №842. **Тираж:** 1062 экз.; №16, 21.04.2023.

**Баш мөхәррир (вазифаһын башҡарыусы) Ф.И. Әхмәтйәнова.**
**Баш мөхәррир урынбаҫары И.Ә. Янбаев.**
**Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17.00 сәғ.**
**Ҡул ҡуйылды - 17.00 сәғ.**
**20 апрель, 2023 йыл.**
**Дежур: Ә. Дауытова.**